بسم الله الرحمن الرحيم

## Бисмилләһир-рахмәнир-рәхим!

«Был донъялағы бөтәһенә лә рәхимле, һәм Ҡиәмәт көнөндә иманлыларға ғына рәхимле булған Аллаһ Тәғәләнең исеме менән» башлайым.

### БИСМИЛЛӘҺ

*Һүҙемдә – Аллаһ!*
*Йөрәгемдә – Аллаһ!*
*Тәмле йоҡога киткәндә,*
*Һәм таңда уянганда ла*
*Телемдә – «Бисмилләһ».*
*Эскәндә, ашаганда,*
*Йә китап уҡыганда,*
*Мәктәпкә барганда,*
*Йә тышта уйнаганда,*
*Ҡабатлайым – «Бисмилләһ».*
*Телем талмай ҡабатлауҙан,*
*«Бисмилләһ»те шыбырлауҙан.*
*Һорайым Раббымдан*
*Һәм йөрәгемдә көс тоям:*
*«Алып барсы, Аллаһ, тура юлыңдан!»..*

М. Асым Көксал.

## ДИНЕБЕҘ ХАҠЫНДА ҺОРАУҘАР ҺӘМ ҠЫҪҠА ЯУАПТАР

**Раббың кем?** Аллаһ.

**Кем һине бар ҡылған?** Аллаһ.

**Һин кемдең ҡоло?** Аллаһтың.

**Ҡайҙан беҙ бар булғанбыҙ һәм ҡайҙа барабыҙ?** Аллаһтан килгәнбеҙ һәм Уға ҡайтарыласаҡбыҙ.

**Ни өсөн беҙ барлыҡҡа килтерелгәнбеҙ?** Аллаһҡа хеҙмәт итер һәм ғибәҙәт ҡылыр өсөн.

**Аллаһҡа хеҙмәт итеү нимәне аңлата?** Тимәк, Аллаһҡа ғибәҙәт ҡылыу, Бәйғәмбәребеҙ юлынан барыу һәм ерҙәге тормошта Аллаһтың берҙән-бер дине Исламда булыу.

**Ни замандан һин мосолманһың?** Әлхәмдүлилләһ, «Ҡалу Бәлә» заманынан.

**Ни аңлата «Ҡалу Бәлә» заманы?** Ерҙе барлыҡҡа килтерер алдынан, Аллаһ Тәғәлә башта бөтә кешеләрҙең йәндәрен барлыҡҡа килтергән дә (беҙгә хәтлем булғандарҙың, әле барҙарҙың һәм киләсәктә тыуасаҡтарҙың) үҙ ҡаршыһына саҡырып:

– *Әләсту бираббикум?* (Минме һеҙҙең Раббығыҙ?) – тип һораған.

– Эйе, Һин беҙҙең Раббыбыҙ! Беҙ Һиңә буйһонасаҡбыҙ, һәм Һинән генә ярҙам һораясаҡбыҙ, – тип яуаплағандар йәндәр. Был «Ҡалу Бәлә» заманы.

**Аллаһ ниндәй?** Аллаһ бер.

**Ҡайһы диндән һин?** Минең динем – Ислам.

**Китабың?** Изге Ҡөрьән.

**Ҡиблаң?** Ҡәғбәтулла Мүәззәмә (Бөйөк).

**Һин кемдең нәҫеленән?** Бәйғәмбәребеҙ Әҙәм *(ғәләйһиссәләм)* нәҫеленән.

**Һин кемдең өммәтенән?** Мөхәммәд *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)* бәйғәмбәр өммәтенән.

**Мөхәммәд** *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)* **бәйғәмбәрҙең атаһының исеме кем булған?** Абдуллаһ.

**Әсәһенең исеме кем булған?** Әминә.

**Уны имеҙеп үҫтергән ҡатындың исеме кем булған?** Хәлимә.

**Уның олатаһының исеме кем булған?** Абдул-Мотталип.

**Бәйғәмбәребеҙ ҡайҙа тыуған?** Мәккә-Мөкәррәмә ҡалаһында.

**Ҡасан тыуған?** 571 йылдың 20 апрелендә.

**Бәйғәмбәребеҙҙең ата-әсәһе ҡасан вафат булған?** Атаһы бәйғәмбәр тыумаҫ борон, ә әсәһе – Уға 6 йәш саҡта.

**Уға нисә йәш саҡта бәйғәмбәрлек килә?** 40 йәшендә һәм 23 йыл эсендә был вазифаны тәүәкәлләп ҡуя.

**Нисә йәшендә бәйғәмбәребеҙ вафат булған?** 63 йәшендә.

**Уның ҡәбере ҡайҙа?** Мәҙинә әл-Мүнәүәрә (Нурлы) ҡалаһында.

**Бәйғәмбәребеҙҙең нисә балаһы булған?** Ете балаһы булған. Ҡыҙҙары: Зәйнәп, Роҡия, Өммөгөлсөм, Фатима. Малайҙары: Ҡасим, Абдуллаһ, Ибраһим. Фатиманан башҡа, бөтә балалары үҙе иҫән саҡта вафат була.

**Беҙҙең өсөн бәйғәмбәребеҙҙең ҡатындары кем?** Бөтә мосолмандарҙыңда әсәләре булып иҫәпләнә.

**Бәйғәмбәребеҙҙең беренсе һәм һуңғы ҡатындары**

**кем булған?** Беренсеһе – Хәҙисә, һуңғыһы – Ғәйшә.

**Бәйғәмбәребеҙҙең нисә ейәне булған?** Ҡыҙы Фатиманан тыуғандар: ике ейәне – Хәсән һәм Хөсәйен, ике ейәнсәре – Зәйнәп һәм Сөкәйнә.

**Улар кемдең балалары?** Ғәли *(разыаллаһу гәнһү)* менән Фатима *(разыаллаһу гәнһәнең)* балалары.

**32 ФАРЫЗ**

**Иман -** йөрәгебеҙ менән бәйғәмбәр Мөхәммәд *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)* Аллаһ Тәғәләнән тапшырып ҡалдырған бөтә нәмәгә ышанып, һәм тел менән Кәлимәи-шәһәҙәт әйтеү була.

*Имандың шарттары: 6 фарыз*

1 – Аллаһтың берлегенә һәм барлығына ышаныу.
2 – Аллаһ бар ҡылған фәрештәләргә ышаныу.
3 – Аллаһ ебәргән китаптарға ышаныу.
4 – Аллаһтың бәйғәмбәрҙәренә ышаныу.
5 – Ҡиәмәт көнөнә һәм үлгәндән һуң тереләсәгебеҙгә ышаныу.
6 – Яуызлыҡ һәм изгелектең Аллаһтан икәненә ышаныу.

*Исламдың шарттары: 5 фарыз*

1 – Иман килтереү – Кәлимәи-шәһәҙәтте тел менән әйтеү.
2 – Рамаҙан айында ураҙа тотоу.
3 – Көндә биш тапҡыр намаҙ уҡыу.
4 – Мөмкинлек булғанда хаж ҡылыу.
5 – Мөмкинлек булғанда йыл һайын зәкәт түләү.

*Тәһәрәт алыуҙың 4 фарызы (вуду):*

1 – Бер тапҡыр битте йыуыу.
2 – Ҡулды терһәктәргә ҡәҙәр йыуыу.
3 – Баштың дүрттән бер өлөшөнә мәсих ҡылыу.
4 – Аяҡтарҙы сыраҡтарға ҡәҙәр йыуыу.

*Ғөсөл ҡойоноуҙың 3 фарызы:*

1 – Ауыҙ эсен сайҡау.
2 – Танауҙы йыуыу.
3 – Бөтөн тәнде ҡоро ер ҡалдырмай йыуыу.

### *Тәйәммүмдең (ер менән тәһәрәтләнеү) 2 фарызы:*

1 - Тәйәммүм ҡылырға ниәтләнеү.
2 - Устар менән таҙа ергә ҡағылып битте һыпырырға, икенсе тапҡыр ергә ҡағылып ҡулдарҙы терһәккә ҡәҙәр һыпырырға.

### *Намаҙҙың 12 фарызы:*

*(намаҙ эсендә – 6, намаҙҙан тыш – 6)*

#### А – Намаҙ шарттары (намаҙҙан тыш фарыздар):

1 – Хәдәстән таҙарыныу: тәһәрәт, ғөсөл һәм тәйәммүм ярҙамында рухи бысраҡлыҡтан таҙарыныу.
2 – Нәжестән таҙарыныу: тәнде, кейемде, намаҙ уҡый торған урынды физик бысраҡлыҡтан таҙартыу.
3 – Ғәүрәт: тәндең тыйылған ерҙәрен кейем менән ҡаплау. Ирҙәрҙең кендектән алып тубыҡтың аҫҡы өлөшөнә ҡәҙәр, ҡатындарҙың бөтөн тәне, бите, ҡул һәм аяҡ остарынан башҡа.
4 – Истиҡбали-Ҡибла – Ҡибла тарафынан йүнәлгән булыу.
5 – Ваҡыт – һәр намаҙҙы үҙ ваҡытында уҡыу.
6 – Ниәт – намаҙ уҡырға эстән ниәтләнеү.

#### Б – Намаҙ рөкөндәре (намаҙ эсендәге фарыздар):

1 – Тәкбир: намаҙҙы тәкбирҙән башлау. Мәҫәлән: «Аллаһу әкбәр».
2 – Ҡыям: намаҙҙы баҫып торған килеш уҡыу.
3 – Ҡыраат – намаҙҙа Изге Ҡөрьәнде уҡыу.
4 – Рөкуғ: билдән эйелеп тороу.
5 – Сәждә: ергә маңлайҙы, ҡул һәм тубыҡтарҙы тейгеҙгәнсе эйелеү.
6 – Ҡадаи-Әхирә: намаҙ һуңында «Әт-тәхиәт»те уҡығанда ултырыу.

## ҒӘМӘЛДӘР

**Фарыз** – Аллаһ Тәғәлә мотлаҡ башҡарырға бойорған намаҙ, ураҙа, зәкәт кеүек ғәмәлдәр. Фарызды үтәмәү – хәрәм. Кем фарызды ҡабул итмәй, имандан сыға.

**Сөннәт** – беҙҙең яратҡан бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәд саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең һүҙҙәре һәм ғәмәлдәре, ғибәҙәт кеүек үтәлгән һәм беҙгә үтәргә тапшырылған.

**Хәрәм** – ярамаған ғәмәлдәр. Мәҫәлән, иҫерткес эсемлектәр эсеү, ҡатындарҙың сит ирҙәр янында яланбаш йөрөүҙәре һ. б. Хәрәмдән тыйылғандар сауаплы, тыйылмағандар гонаһлы булыр. Кем быға инанмай диндән сыға.

## БӘҘРӘФКӘ БАРЫУ

- Бәҙрәфкә инер алдынан, салбарҙың балаҡ остарын күтәрер кәрәк. Баҫып торған килеш ихтыяждарҙы башҡарырға ярамай.
- Бәҙрәфтә ашарға, эсергә һәм һөйләшергә ярамай.
- Бәҙрәфкә һул аяҡ менән инәләр, уң аяҡ менән сығалар.

Бәҙрәфтән һуң таҙарыныу ҡағиҙәһе (истинжә): ағзалар һул ҡул менән йыуыла. Һыу һауыттан (крандан) уң ҡул менән алына. Һыу булмағанда ҡағыҙ ҙа файҙаланырға ярай һ. б.

Был ҡағиҙәләр намаҙ уҡырға йыйынған мосолмандар өсөн бигерәк тә мөһим.





## ТӘҺӘРӘТ АЛЫУ (ЙЫУЫНЫУ) – ВУДУ

**Тәһәрәт** (вуду) битте, ҡулдарҙы терһәктәргә ҡәҙәр, табанҙарҙы; баштың дүрттән бер өлөшөн һыулы ҡул менән һыпырыуҙан тора.

*Тәһәрәт алыу тәртибе:*

Мөмкинлек булһа, Ҡәғбә тарафына борологға.

Эстән: «Ниәт иттем тәһәрәт алырға, әғүҙү билләһи минәш-шайтанир-ражим. Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахи-им» - тип әйтелә.

Шунан ҡулдар беләккә ҡәҙәр өс мәртәбә йыуыла. Бармаҡ араларында ҡоро ер ҡалмаҫҡа тейеш. Бармаҡтарҙа йөҙөк булһа, шылдырып йә сисеп, уның аҫты ла йыуыла.



Бынан һуң, уң ус менән ауыҙға өс мәртәбә һыу алып, сайҡарға һәм төкөрөргә. Тештәрҙе мисүәк, теш щеткаһы йәки ҙур һәм һуҡ бармаҡтар менән таҙартырға.



Өс мәртәбә уң уска һыу алынып, танауға һыу тартыла, һул ҡул менән һемгерелә.



Маңлайҙа сәстәр үҫә башлаған ерҙән башлап, эйәк аҫтына ҡәҙәр йөҙҙө йыуырға.



Уң ҡул, һуңынан һул ҡул терһәккә ҡәҙәр өс мәртәбә йыуыла.





Һыулы уң ҡул менән баштың дүрттән бер өлөшөнә бер мәртәбә мәсих ҡылына.



Бер мәртәбә һыулы һуҡ бармаҡ менән ҡолаҡтарҙың эсен, баш бармаҡ менән ҡолаҡтарҙының тыш яғын һөртөргә.



Өс бармаҡтың тышҡы яғы менән муйындың артына мәсих ҡылына.



Иң элек бармаҡ остарынан башлап, уң аяҡ, һуңынан һул аяҡ сираҡтарға ҡәҙәр өс мәртәбә йыуыла.



Уң ҡул менән һыу алып эсеү сөннәт һанала.

Тәһәрәт тамамланғас, «Кәлимәи Шәһәҙәт» әйтеү һәм өс тапҡыр «Әл-Ҡәҙер» уҡыу күп сауаплы һанала.

***Вуду, тәһәрәттең фарыздары:***

1 – Бер тапҡыр битте йыуыу.
2 – Ҡулды терһәктәргә ҡәҙәр йыуыу.
3 – Баштың дүрттән бер өлөшөнә мәсих ҡылыу.
4 – Табанҙарҙы сираҡтарға ҡәҙәр йыуыу.

***Тәһәрәттең сөннәттәре:***

1 – Тәһәрәт алырға ниәтләнеү.
2 – «Әғүҙү билләһи минәш-шайтанир-ражим. Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим» – тип әйтеүҙән башлау.
3 – Тәүҙә ҡулдарҙы йыуыу.
4 – Тештәрҙе мисүәк, теш щеткаһы йәки баш һәм һуҡ бармаҡтар менән таҙартырға.
5 – Ҡоро ер ҡалдырмаҫлыҡ итеп йыуыныу.
6 – Устар менән ышҡып йыуыу.
7 – Өс мәртәбә ауыҙға һыу алып, сайҡау һәм төкөрөү.
8 – Ураҙала булмағанда, ауыҙҙы тултырғансы һыу алыу.
9 – Өс мәртәбә танауға һыу тартырға, һул ҡул менән һемгерелә; ураҙала булмағанда һыуҙы күберәк алырға.
10 – Тән ағзаларын йыуғанда ҡағиҙә буйынса башҡарырға.
11 – Тәндең һәр бер ағзаһын өс тапҡыр йыуырға.
12 – Ҡулдарҙы, аяҡтарҙы бармаҡ остарынан йыуа башларға.
13 – Бармаҡ araларын йыуырға.
14 – Һыулы бармаҡтар менән һаҡалды тарарға.
15 – Бармаҡта йөҙөк булһа, уның аҫты ла йыуыла.
16 – Ҡолаҡтарҙы еүешләп һөртөргә.

***Тәһәрәтте боҙа торған ғәмәлдәр:***

1 – Кесе йәки оло ярау башҡарыу, арттан һауа сығарыу.
2 – Тәндең берәй еренән ҡан, эрен, һары һыу килеүе.

3 – Ауыҙ тултырып ҡоҫоу.

4 – Төкөргәндә төкөрөгөнөң яртыһы йәки унан да күберәге ҡан булһа.

5 – Берәй нәмәгә һөйәлеп йоҡлау.

6 – Һуштан яҙыу, иҫереү.

7 – Намаҙ уҡығанда башҡалар ишетелерлек итеп көлөү (намаҙҙа булмаған ваҡытта көлөү тәһәрәтте боҙмай).

8 – Тәһәрәт, ғөсөл ҡойонорға ҡамаусалаған, һыу үткәрмәҫлек матдаләрҙең тәндә булыуы (тырнаҡ лагы, ҡамыр һ. б.).

*Тәһәрәтһеҙ нимәләр эшләргә ярамай:*

1 – Намаҙ уҡылмай.

2 – Ҡөрьән Кәримгә ҡул менән ҡағылырға ярамай.

3 – Ҡәғбә тәуаф ителмәй.

4 – Сәждә ҡылырға ярамай: Тиләүәт, Шөкөр, Сәһү сәждәһе, ҡылынмай һ. б.

## ТӘЙӘММҮМ

**Тәйәммүм** – ҡулды һәм битте таҙа ер менән һыпырыу.

*Тәйәммүм нисек ҡылына:*

Эстән «Әғүҙү билләһи минәш-шайтанир-ражим. Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим. Тәйәммүм ҡылып таҙарынырға ниәтләндем», – тип әйтергә. Бармаҡтарҙы айырып, устарҙы таҙа ергә батырырға һәм ҡулды тәүҙә – үҙеңдән, шунан кире, үҙеңә табан тартырға. Устар менән битте һыпырырға. Икенсе тапҡыр ергә ҡағылып, ҡулдарҙы терһәккә ҡәҙәр һыпырырға.



Тәйәммум ҡылыуҙың тәртибе ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар тарафынан бер төрлө башҡарыла.

***Тәйәммумдең фарыздары:***

1 – Тәйәммум алырға ниәтләнеү.

2 - Устарҙы таҙа ергә батырыу һәм устар менән битте, һуңынан ҡулдарҙы терһәккә ҡәҙәр һыпырыу.

***Тәйәммумдең сөннәттәре:***

1. «Әғүҙү билләһи минәш-шайтанир-ражим. Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим» һүҙҙәренән башларға.



2. Бармаҡтарҙы айырып таҙа ергә ҡағылырға.



3. Устар менән ерҙән тәүҙә – үҙеңдән, шунан кире, үҙеңә табан тартырға.



4. Тәртибен һаҡлап, бер өҙлөкһөҙ башҡарырға.



*Тәйәммум ҡылыр өсөн сәбәптәр:*

Тәһәрәт йә ғөсөл урынына теләгән кеше түбәндәге сәбәптәр буйынса тәйәммүмде ала ала:

1 – Һыу сығанағының бер саҡырымдан (бер*милянан) да алыҫта булыуы (3032 метр).
2 – Ауырыу булыу.
3 – Һыуыҡ булһа.
4 – Дошман тарафынан ҡурҡыныс янаһа.
5 – Һыу сығанағы булмай, ә ҡуллана торған һыу аҙ ҡалһа.

## ОЛО ТӘҺӘРӘТ – ҒӨСӨЛ

**Ғөсөл –** бөтә тәнде йыйыу.

*Ғөсөлдөң фарыздары 3:*

1 – Мазмаза: Ауыҙҙы тамаҡтың төбөнә саҡлы сайҡау.
2 – Истиншак: танауҙы йыуыу.
3 – Ҡоро ерен ҡалдырмай бөтә тәнде йыуыу.

Ауыҙҙы сайҡағандан һуң бер йотом һыу йотоп ҡуйыу яҡшыраҡ.

*Ғөсөлдөң сөннәттәре:*

1 – Ҡулдарҙы өс мәртәбә йыуыу.
2 – Енси ағзаларҙы йыуыу.
3 – Әгәр тәндә бысраҡ булһа, уны таҙаларға.
4 – Тәһәрәт алырға.
5 – Бөтә тәнде өс мәртәбә йыуырға.
6 – Башҡа өс тапҡыр һыу ҡойорға, һуңынан – өс мәртәбә уң яҡҡа, өс мәртәбә һул яҡҡа.
7 – Ғөсөл ҡойонорға йөрәк менән ниәтләнеү һәм тел менән ғөсөл алырға ниәт әйтеү.
8 – Ҡулдарҙы йыуғанда «Әғүҙү билләһи минәш-шайта-

нир-ражим. Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим» һүҙҙәрен әйтеү.

9 – Һыуҙы күп исраф итеүҙән һаҡланырға.

10 – Ғәүрәтте ҡапларға, был бигерәк тә мунсала мөһим.

11 – Тәнде ҡул менән ышҡып йыуырға.

12 – Кешеләргә күренмәй йыуынырға.

13 – Ғөсөл ҡойонғанда һөйләшмәҫкә.

14 – Ҡибла тарафына ҡарап йыуынырға.

***Фарыз, сөннәттәрен һәм әҙәп ҡағиҙәләрен ҡулланып ғөсөл алыу:***

Ғөсөл аласаҡ кеше, иң элек «Әғүҙү билләһи минәш-шайтанир-ражим. Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим» һүҙҙәрен әйтеп йыуынырға ниәт итә. Ҡулдарын терһәктәргә ҡәҙәр йыуғандан һуң, оят ерҙәрен йыуа.

Бынан һуң, уң усы менән ауыҙға өс мәртәбә һыу алып, һәр ҡабатында ла ауыҙҙың эсен тамағына ҡәҙәр яҡшылап сайҡата. Һуңынан, уң усы менән танауға өс мәртәбә һыу алып, һәр ҡабатында һул ҡул менән һемгереп, танауын таҙарта.

Бынан һуң, ҡәҙимге тәртип буйынса тәһәрәт алына. Әгәр йыуынғанда аяҡ аҫтына һыу йыйыла икән, аяҡтар иң һуңынан йыуыла. Тәһәрәт алынып бөткәс, иң элек өс мәртәбә башҡа, унан һуң өс мәртәбә уң, өс мәртәбә һул яурынға һыу ҡойола. Һәр ҡойоуҙа тәндең ҡул еткән һәр ере ышҡып йыуыла.

Айырым кендек һәм башҡа ерҙәр, ҡоро ер ҡалдырмай торған итеп тәндең һәр ере йыуыла. Әгәр сәс оҙон икән, ул тағатып йыуыла. Әгәр тәндә йәрәхәтте бәйләгән бәйләм бар һәм уға һыу тейгеҙергә теләмәйһегеҙ икән, бәйләмдең өҫтөнән һыулы ҡул менән һыпырырға.

***Ғөсөлдөң физик яҡтан файҙаһы:***

Ғөсөл – тулы ритуаль таҙарыныу, кешене рухи бысраҡлыҡтан таҙарта һәм, һис шикһеҙ, бөтә тән өсөн файҙалы. Ғөсөл организмдың физик тонусын нормаллаштерә. Ғөсөлдән һуң йөрәк-тамыр эше яҡшыра, ҡан баҫымы, тән һулышы рәтләнә, тәндән иҫәпһеҙ ауырыу микроптар йыуы-

лып төшөрөлә.

***Ғөсөл ҡойоноу өсөн кәрәкле булған нәмәләр:***

Ирҙәр менән ҡатындар енси мөнәсәбәттән һуң ғөсөл ҡойонорға тейеш, ҡатын-ҡыҙҙар – күрем хәленән һәм бала тапҡандан һуң таҙарынғас.

Ғөсөл ҡойонғанда сәстең төбөн йыуыу фарыз һанала. Әгәр йыуынғанда һыу сәстең төбөн еүешләһә толомдо тағатмағанда ла була. Йыуынғанда кейелгән балдаҡ, алҡаларҙы урындарынан ҡуҙғатыу үәжиб һанала.

Ауыҙҙы, танауҙы сайҡау, артабан бөтөн тәнде еүешләп, баш һәм яурындар аша һыу менән ҡойоноу, шулай уҡ өс тапҡыр таҙа аҡмаған һыуға (45-50 кв.м) сумып сығыу ғөсөл ҡойоноу һанала.

Ағын һыуҙа ҡойоноп сыҡҡандың да ғөсөлө дөрөҫ һанала.

Тирелә, тырнаҡ аҫтында һыу үтергә ҡамаусалаған берәй нәмә булһа (лак, ҡамыр һ. б.), ғөсөл тулы иҫәпләнмәй.

***Ғөсөлһөҙ нимә эшләргә ярамай:***

1 – Мәсеткә кермәйҙәр.
2 – Изге Ҡөрьәнде уҡымайҙар.
3 – Изге Ҡөрьәнгә ҡағылырға ла ярамай.
4 – Ҡәғбәне тәуаф ҡылмайҙар.
5 – Намаҙ ҡылмайҙар.
6 – Күрем хәлендә һәм бала тапҡандан һуң таҙарынмай намаҙ ҡылмайҙар, ураҙа тотмайҙар (ураҙалары күсерелә).

***Ҡатын-ҡыҙҙар үҙенсәлекле хәлдәре:***

1 – Күрем хәле – Хайид.
2 – Бала тапҡандан һуңғы таҙарыныу – Нифас.
3 – Патологик (туктауһыҙ) ҡан ағыуы – Ғөзөр.

Быларҙы һәр ҡатын-ҡыҙға белеү фарыз. Быларҙы өйрәтеү вазифаһы уларҙың ирҙәренә һәм ҡараусыларына (бағыусыларына) йөкмәтелгән.

## АҘАН

«Аллаһу әкбәр» – «Аллаһ Бөйөк» – 4 мәртәбә.

«Әшһәду әллә иләһә иллаллаһ» – «Аллаһтан башҡа илаһ юҡ, тип шаһитлыҡ ҡылам» – 2 мәртәбә.

«Әшһәду әннә Мәхәммәдәр-рәсүлүллаһ» – «Мөхәммәд *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)* – Аллаһтың рәсүле, тип шаһитлыҡ ҡылам» – 2 мәртәбә.

«Хәййә ғәләс-сәләәһ» – «Намаҙға барығыҙ» – 2 мәртәбә.

«Хәййә ғәләл фәләәх» – «Уңышҡа ирешегеҙ» – 2 мәртәбә.

«Аллаһу әкбәр» – «Аллаһ Бөйөк» – 2 мәртәбә.

«Лә иләәһә илләллаһ» – «Аллаһтан башҡа илаһ юҡ» – 1 мәртәбә.

Иртәнге намаҙҙа «Хәййә ғәләл фәләәх» тигәндән һуң 2 мәртәбә «Әссаләту хайрум минәннәүм» – «Намаҙ йоҡоға ҡарағанда яҡшыраҡ» тип әйтелә.

Ҡамәт әйткәндә «Хәййә ғәләл фәләәх» тигәндән һуң, «Ҡад ҡамәтис-саләһ» – «Намаҙ башланды», - тип 2 мәртәбә әйтелә.

Ҡамәт аҙанға ҡарағанда тиҙерәк әйтелә. Аҙан һуҙып һәм тирә-яҡтағы бөтә мосолмандар ҙа ишетһен өсөн ҡысҡырып уҡыла.

Аҙандан һуң доға уҡыла: «Аллаһүммә Раббә һәәҙиһид-дәғүәтит-тәммәти үәс-салатил-ҡаимати, әәти сәйиҙинә Мөхәммәдинил-үәсиләтә үәл-фадыләтә вад-даражатар-рафиғаһ. Вабъасху макааман махмудан, әлләҙии үәғадтаһу. Иннәкә ләә тухфлифуль миигаад».

## ХИКӘЙӘ:

**Аллаһ беҙҙән нимә һорай?**

Бер ваҡыт Әхмәт атаһына баҡсалағы бесәнде сабырға ярҙам итә ине. Атаһы:

– Улым, миңә һыу эсергә килтер әле? – тип һораны.

Атаһы һыу эскән мәлдә аҙан тауышы яңғыраны.

– Рәхмәт, улым! Һинән нимә һорағандар – һин шуны эшләнең. Хәҙер ҡара, Аллаһ беҙҙән нимә һорай, беҙ икәү бергә тағы ла нимәлер эшләргә тейешбеҙ. Әхмәт аптырап атаһына ҡараны:

– Атай, Аллаһ беҙҙең нимәнелер эшләүебеҙҙе теләйме?

– Эйе, улым.

– Тик, мин бер нимә лә тоймайым.

– Ә һин бит аҙанды ишетәң.

– Эйе, тик...

– Аллаһ беҙгә ҡушҡандарын шулай, төрлө юлдар менән еткерә. Мәҫәлән, аҙан уҡыу мосолмандарға Аллаһтың «Намаҙ уҡығыҙ!» – тип, намаҙ уҡырға бойорғанын еткерә. Шуға ла, намаҙ уҡыу ваҡыты еткән һайын, беҙ шул бойороҡто ишетәбеҙ.

## НАМАҘҘАН БАШ ТАРТМА

*Бер көндә ҡалдырма намаҙҙы мосолман,*
*Көндә уҡы уны, баш тартма намаҙҙан.*

*Биш тапҡыр: иртән, төш, кис, ахшам һәм төнөн,*
*Намаҙға бас, таҙарынып йәнең менән!*

*Кемдәр намаҙға баҫа – Аллаһ нуры менән балҡып йөҙҙәре.*
*Аллаһтың бойороғонан баш тартҡандарҙың һүнер йөҙҙәре.*

*Намаҙға баҫҡанда – Аллаһ ҡаршына баҫаһың.*
*Уға өндәшеп, Илаһи нур менән яҡтыраһың.*

*Тәһәрәт алып, таҙа бул иртәндән,*
*Бәпес, һәр ваҡыт таҙа булырға өйрән!*

*Кем таҙа – ул интекмәй ауырыуҙан бер ҡасан,*
*Һаулыҡ, бәхет һәм шатлыҡта була һәр заман.*

**М.Ш. Ялткая**

## НАМАҘ

### *Намаҙ ҡылмаған өсөн яза:*

Беҙҙең яратҡан бәйғәмбәребеҙ *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)* хәҙис аша беҙҙе шулай иҫкәртә:

**«Намаҙ уҡымау кешенең иман менән көфөрлөк уртаһында булыуын белдерә. Тимәк, намаҙҙан баш тартыу – көфөрлөккә инеү. Намаҙ уҡымау иманһыҙлыҡҡа (көфөрлөк) юлына илтә».**

Исламда намаҙҙан тулыһынса бушатылыу юҡ, хатта ауырыу һәм хәлһеҙҙәр ҙә намаҙ уҡыйҙар. Хатта һуғыш ваҡытында ла намаҙҙы төшөрөп ҡалдырырға ярамай.

Намаҙ уҡымаған өсөн дә һәм намаҙ уҡыу ҡағиҙәһен боҙоусылар өсөн дә яза ҡаралған. Улар, кем намаҙҙан урлай: имамды уҙғандар, рөкүғ менән сәждәне тулыһынса ҡылмағандар һ. б.

Бер хәҙис аша бәйғәмбәребеҙ *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)* беҙҙе шулай иҫкәртә: **«Кешеләрҙән иң ҡурҡыныс бур – ул намаҙҙан урлаған бур».**

***Намаҙҙарҙың ваҡыты һәм тәртибе:***

**1 – Иртәнге намаҙ (Сабах, Ас-Субх).** Ваҡыты ҡояш сыҡҡанға хәтлем дауам итә. 4 рәҡәғәт: 2 рәҡәғәт сөннәт, һәм 2 рәҡәғәт фарыз.

**2 – Төшкө намаҙ (Өйлә, Әз-Зухр).** Ваҡыты ҡояш нәҡ баш осонда булғандан һуң керә. 10 рәҡәғәт: 4 рәҡәғәт элекке сөннәт, 4 рәҡәғәт фарыз, 2 рәҡәғәт һуң сөннәт.

**3 – Төштән һуңғы (Икенде, Әл-Ғаср).** Предметтарҙан күләгә ике тапҡырға артҡас намаҙ ваҡыты керә. 8 рәҡәғәт: 4 рәҡәғәт сөннәт, 4 рәҡәғәт фарыз.

**4 – Киске намаҙ (Аҡшам, Әл-Мәғриб).** Ваҡыты ҡояш байығас керә: 5 рәҡәғәт: 3 рәҡәғәт фарыз, 2 рәҡәғәт сөннәт.

**5 – Төнгө намаҙ (Йәстү, Әл-Ишә).** Ваҡыты аҡшам намаҙынан һуң кереп, иртәнге намаҙға хәтле дауам итә. 13 рәҡәғәт: 4 рәҡәғәт элекке сөннәт, 4 рәҡәғәт фарыз, 2 рәҡәғәт һуң сөннәт, 3 рәҡәғәт Витр намаҙы.

**Витр намаҙы –** һәр ваҡыт төнгө намаҙҙан һуң уҡыла.

**Фарыз намаҙҙар –** Аллаһ Тәғәлә тарафынан бойоролған мотлаҡ үтәлергә тейешле намаҙҙар.

**Үәжиб намаҙҙар –** фарыз намаҙҙарға яҡын мотлаҡ үтәлергә тейешле намаҙҙар.

**Сөннәт намаҙҙар –** был намаҙҙарҙы бәйғәмбәр *(саллаллаһу гәләйһи үә сәллам)* уҡырға ҡушҡан һәм саҡырған.

**Нәфел намаҙҙар –** беҙҙе Аллаһ Тәғәләгә яҡынайта торған намаҙҙар (нәфел тип, өҫтәлмә рәүештә уҡыла торған намаҙҙарҙы әйтәләр).

* * *

***Намаҙ ҡылырға рөхсәт ителмәгән ваҡыттар:***

**1 – Ҡояш ҡалҡҡанда.** Әгәр иртәнге намаҙ ваҡытында ҡояш ҡалҡа башлаһа – намаҙ боҙола.

**2 – Зәүүәл ваҡыты.** Өйлә намаҙы башланыр алдынан 45 минут алда.

**3 – Ҡояш байығанда.** Аҡшам намаҙына әйтеләсәк аҙан алдынан 45 минут алда. Әгәр өлгөрмәй ҡалһаң, ҡояш байығанда икенде намаҙының фарызын ғына уҡырға мөмкин.

## ИРТӘНГЕ НАМАҘ ҠЫЛЫУ ТӘРТИБЕ

## НАМАҘҘЫҢ БАШЫ ҺӘМ НИӘТ

1) Тәһәрәт алғандан һуң, ҡиблаға табан йүнәлеп тура баҫырға һәм ниәт әйтергә:

«Аллаһ ризалығы өсөн бөгөнгө иртәнге намаҙҙың 2 рәкәғәт сөннәтен (йә 2 рәкәғәт фарыҙын) ҡылырға ниәт иттем».

Аяҡ араларында дүрт бармаҡ һыйышлы ара ҡалдырып баҫырға, күҙ ҡарашын сәждә ҡыласаҡ урынға төбәргә.





## ТӘКБИР ӘЙТЕҮ

2) Ниәттән һуң «Аллаһу әкбәр» тип тәкбир әйтелә, шул уҡ ваҡытта ҡулдарҙы ҡолаҡ осо тәңгәленә хәтлем күтәрергә. Устар асыҡ яғы менән Ҡибла тарафына йүнәтелә. Һуңынан ҡулдарҙы эскә, кендек тирәһенә ҡуйырға.

Ҡатын-ҡыҙ тәкбир әйткәндә ҡулдарының бармаҡ остарын елкә тәңгәленә тейҙереп, һуңынан күкрәгенә һала.





## ҠЫЯМ ҺӘМ ҠЫРААТ (баҫып тороу һәм Ҡөрьән уҡыу)

3) Тәкбирҙән һуң уң ҡул һул ҡул өҫтөнә һалына һәм ҡулдың баш һәм сәтәкәй бармаҡтары менән һул ҡулды беләҙекләп тота.

Тәкбирҙән һуң ҡатын-ҡыҙҙар, уң ҡулды һул ҡул өҫтөнә ҡуйған хәлдә, ҡулдарын күкрәк өҫтөнә ҡуя.





4) Ҡулдарҙы ҡуйғандан һуң эстән «Сүбхәнәкә» уҡыла:

«Сүбхәәнәкәл-лааһуммә үә бихәмдик үә тәбәәрәкәсмүкә, үә тәғәәләә жәддүкә (үә жәллә çәнәук) үә ләә иләәһә ғайрук».

5) Һуңынан «Фатиха» сүрәһен уҡырға:

اَعُوذُ بِاللّٰهِ مِنَ الشَّيْطَانِ الرَّجِيمِ

**«Әғүүзу билләәһи минәш-шайтаанир-раджиим.**

بِسْمِ اللهِ الرَّحْمَنِ الرَّحِيمِ {١}

الْحَمْدُ للهِ رَبِّ الْعَالَمِينَ {٢}

الرَّحْمنِ الرَّحِيمِ {٣}

مَالِكِ يَوْمِ الدِّينِ {٤}

إِيَّاكَ نَعْبُدُ وإِيَّاكَ نَسْتَعِينُ {٥}

اهدِنَــا الصِّرَاطَ المُستَقِيمَ {٦}

صِرَاطَ الَّذِينَ أَنعَمتَ عَلَيهِمْ غَيرِ المَغضُوبِ

عَلَيهِمْ وَلاَ الضَّالِّينَ {٧}

**Бисмилләәһи-ррахмәәни-ррахиим! Әл-хәмдү лилләәһи раббил-ғәәләмиин. Әр-рахмәәни-ррахиим. Мәәлики йәүми-ддиин. Иййәәкә нәғбүдү үә иййәәкә нәстәғиин. Иһдинәә-ссырааталь-мүстәкиим. Сыраата-лләҙиинә әнғәмтә ғәләйһим ғайриль мағдууби ғәләйһим үә ләә-ддаальлиин».**

6) «Фатиха» сүрәһен уҡығандан һуң, тағы бер ҡыҫҡа сүрә уҡыла. Мәҫәлән, «Кәүҫәр» сүрәһе:

إِنَّا أَعْطَيْنَاكَ الْكَوْثَرَ {١}

فَصَلِّ لِرَبِّكَ وَانْحَرْ {٢}

إِنَّ شَانِئَكَ هُوَ الأَبْتَرُ {٣}

**«Иннәә әғтайнәәкәл кәүҫәр. Фәсалли ли раббикә үәнхәр. Иннә шәәни-әкә һуәль-әбтәр».**

## РӨҠУҒ

7) Ҡырааттан һуң (Ҡөрьәндән «Әл-Фатиха» һәм бер ҡыҫҡа сүрә уҡығандан һуң) «Аллаһу әкбәр» тип, рөҡуғҡа кителә, билдән 90° бөгөлөргә. Рөҡуғта баш һәм бил бер кимәлдә, арҡа тура була. Рөҡуғта булғанда аяҡ бармаҡтары осона ҡарала. Бармаҡтар асыҡ булған хәлдә ҡулдары менән тубыҡ ҡапҡастарын тоталар. Терһәктәр һәм теҙҙәр тура тора. Шулай торған килеш өс мәртәбә «Сүбхәәнә раббийәл ғаҙыим» тиелә. Был тәсбих 3, 5, йә 7 мәртәбә әйтелә.



Ҡатын-ҡыҙҙар рөҡуғта аҙыраҡ эйелә, 45° тирәһе. Ҡулдарын (бармаҡтарын асмайынса) тубыҡтары өҫтөнә ҡуялар һәм тубыҡтар бер аҙ ғына бөгөлгән була.



Ҡәүмә: Рөкуғтан турайып тыныс тороу.





8) Рөкуғтан торғанда «Сәмиғәллааһү лимән хәмидәһ» тип, һәм турайғас «Раббәнәә ләҡәл-хәмд» тип әйтелә. Бер аҙ тыныс торғандан һуң «Аллаһу әкбәр» тип әйтелә һәм сәждәгә кителә.

## СӘЖДӘ



9) Сәждәгә киткәндә бер-бер артлы тубыҡтар, унан һуң ҡулдар, унан һуң маңлай һәм танау ергә тейҙерелә. Сәждәлә бармаҡтар бергә, баш менән ҡул бер үк тигеҙлектә. Сәждә ҡылғанда аяҡтар бергә, ә аяҡ бармаҡтары күтәрелмәй. Терһәктәр ерҙән юғарыраҡ була. Ҡул, һәм аяҡтар бармаҡтары ҡиблаға ҡаратыла. Эс тубыҡтарға тейгеҙелмәй, терһәктәр ергә һәм эскә теймәй.



Ҡатын-ҡыҙҙар сәждәлә ҡулдарын (терһәктәрен) ергә терәп һәм кәүҙәләренә һырыҡтырып ҡуялар.



Сәждәлә өс мәртәбә «Сүбхәнә раббийәл-әғлә» тип әйтелә.

10) «Аллаһу әкбәр» тип әйтеп ултырырға. Был ултырыш «ЖӘЛСӘ» тип атала. Жәлсәлә ултырғанда һул аяҡ өҫтөнә ултырыла, аяҡты уң яҡҡа бороп. Уң аяҡ бармаҡтары ергә терәлә һәм алға ҡаратыла. Бармаҡтар тубыҡтарҙың өҫтөндә була. Жәлсәлә «Сүбхәналлаһ» тип әйтерлек ваҡыт ултырып торола.









Ҡатын-ҡыҙҙарҙың аяҡтары, ятҡырылып, уң тарафҡа йүнәлтелә һәм ошо рәүештә ултырыла.

Һуңынан «Аллаһу әкбәр» тип, икенсе тапҡыр сәждәгә барыла һәм өс мәртәбә «Сүбхәнә раббийәл-әғлә» тип әйтер кәрәк.

## ИКЕНСЕ РӘҠӘҒӘТ

11) «Аллаһу әкбәр» тип, (иң элек баш, һуңынан ҡулдар һәм теҙҙәрҙе ҡалҡытып) ултырылмай сәждәнән аяҡҡа икенсе рәкәғәткә баҫыла. Ҡулдарҙы кеҙдек кимәлендә бер-береһенең өҫтөнә ҡуйып, ҡыямға баҫыла. Быныҡ менән иртәнге намаҙҙың беренсе рәкәғәте тамамлана һәм икенсе рәкәғәт башлана.

### Икенсе рәкәғәттә ҠЫЯМ ҺӘМ ҠЫРААТ

Икенсе рәкәғәттә «Сүбхәнәкә» уҡылмай. Ҡулдарҙы кендек өҫтөнә ҡуйғандан һуң «Бисмилләәһи-ррахмәәни-ррахим» тип әйтелә һәм «Фатиха» сүрәһе уҡыла, һәм бер ҡыҫҡа сүрә йәки 3 аят уҡыла.

بِسْمِ اللهِ الرَّحْمنِ الرَّحِيمِ {١}

الْحَمْدُ للهِ رَبِّ الْعَالَمِينَ {٢}

الرَّحْمنِ الرَّحِيمِ {٣}

مَالِكِ يَوْمِ الدِّينِ {٤}

إِيَّاكَ نَعْبُدُ وإِيَّاكَ نَسْتَعِينُ {٥}

اهدِنَــا الصِّرَاطَ المُستَقِيمَ {٦}

صِرَاطَ الَّذِينَ أَنعَمتَ عَلَيهِمْ غَيرِ المَغضُوبِ

عَلَيهِمْ وَلاَ الضَّالِّينَ {٧}

**«Бисмилләәһи-ррахмәәни-ррахиим! Әл-хәмдү лилләәһи раббил-ғәәләмиин. Әр-рахмәәни-ррахиим. Мәәлики йәүми-ддиин. Иййәәкә нәғбүдү үә иййәәкә нәстәғиин. Иһдинәә-ссыраатаЛь-мүстәкиим. Сыраата-лләҙиинә әнғәмтә ғәләйһим ғайриль мағдууби ғәләйһим үә ләә-ддаальлиин».**

قُلْ هُوَ اللَّهُ أَحَدٌ {١}

اللَّهُ الصَّمَدُ {٢}

لَمْ يَلِدْ وَلَمْ يُولَدْ {٣}

وَلَمْ يَكُن لَّهُ كُفُواً أَحَدٌ {٤}

«Әл-Ихлас»: **«Ҡуль һүүәллааһу әхәд. Аллааһү-ссамәд. Ләм йәлид үә ләм йүүләд. Үә ләм йәкүл-ләһү күфүүән әхәд».**





## РӨҠУҒ

«Аллаһу әкбәр» тип, рөҡуғҡа эйеләбеҙ. Һәм өс мәртәбә «Сүбхәәнә раббийәл-ғаҙыим» тип әйтелә. «Сәмиғәл-лааһу лимән хәмидәһ» тип, тураябыҙ. «Раббәнәә ләҡәл-хәмд» һәм

«Аллаһу әкбәр» тип, сәждәгә барыла.





Ҡатын-ҡыҙҙар рөкуғта аҙыраҡ эйелә. Бармаҡтар тубыҡтар өҫтөнә ҡуйыла. Тубыҡтар һәм терһәктәр бер аҙ ғына бөгөлгән була.

## СӘЖДӘ

13) Өс мәртәбә «Сүбхәнә раббийәл-әғлә» тип әйтелә һәм «Аллаһу әкбәр» тип, сәждәнән ҡалҡып ултырыла. Һуңынан, тағы «Аллаһу әкбәр» тип, икенсе тапҡыр сәждә ҡылына. Өс мәртәбә «Сүбхәнә раббийәл-әғлә» тип әйтелә.







Ҡатын-ҡыҙҙар сәждәлә теҙҙәрен ергә тереп, кәүҙәләренә һыҡтырып ҡуялар.

## «ӘТ-ТӘХИӘТ» ӨСӨН УЛТЫРЫШ

«Аллаһу әкбәр» тип, сәждәнән ҡалҡып ултырыла. Был ултырыш «Ҡадаи-Әхирә», «һуңғы ултырыш» тип атала. Ултырғанда ирҙәр һул аяҡ өҫтөнә ултыралар, уң аяҡ ергә терәлә, бармаҡтар Ҡәғбә тарафына йүнәлтелә. Ҡул бармаҡтары бер аҙ асылған килеш теҙҙәрҙең өҫтөнә ҡуйыла. Ҡараш тубыҡҡа төбәлә. Ошо рәүешле «Әт-тәхиәт» доғаһы уҡыла.

Ҡатын-ҡыҙҙар бер аҙ башҡа, һул яҡҡа, бөгөлгән аяҡтарҙы уң яҡҡа сығарып, иркенерәк ултыралар. Ҡулдар тубыҡ өҫтөнә ҡуйыла.







«ӘТ-ТӘХИӘТ» доғаһы: **«Әт-тәхиййәәтү лилләәһи үәссаләүәәтү үә-ттаййибәәт. Әс-сәләәмү ғәләйкә әййүһән-нәбиййү үә рахмәтуллааһи үә-бәракәәтүһ. Әс-сәләәмү ғәләйнә үә ғәләә ғибәәдилләәһи-ссаалихиин. Әшһәду әлләә иләәһә илләллааһу үә әшһәду әннә Мөхәммәдән ғәбдүһү үә расүүлүһ».**

Һуңғы ултырышта «Әт-тәхиәт» доғаһын уҡығандан һуң «Сәлли», «Бәрик», «Раббәнә» доғалары уҡыла:

**«Аллаһүммә салли ғәләә Мөхәммәдин үә ғәләә әәли Мөхәммәд. Кәмәә салләйтә ғәләә Ибрааһиимә үә ғәләә әәли Ибрааһиимә иннәкә хәмиидүм мәжиид».**

**«Аллаһүммә бәрик ғәләә Мөхәммәдин үә ғәләә әәли Мөхәммәд. Кәмәә бәрактә ғәләә Ибрааһиимә үә ғәләә әәли Ибрааһиимә иннәкә хәмиидүм мәжиид».**

**«Раббәнәә әтинә фиддунйа хәсәнәтән үә фил әхирати хәсәнәтән үә ҡина ғаҙабәннар».**

**«Раббәнәә ғфирли үәли-үәлидәййә үә лил мөьминиинә йәүмә йәҡүүмүл хисәәб».**

15) Был доғаларҙы уҡығандан һуң башты уңға бороп, ҡарашты уң ҡулбашҡа төбәп, «Әс-сәләәмү ғәләйкүм үә рахмәтуллааһ» тип әйтәләр. Һуңынан башты һулға бороп, шулай уҡ «Әс-сәләәмү ғәләйкүм үә рахмәтуллааһ» тип әйтәләр.





Иртәнге намаҙҙың сәннәте һәм фарызы шулай ҡылына. Фарыз намаҙынан һуң, бәйғәмбәребеҙ *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)* ҡушыуы буйынса өс мәртәбә «Ыстағафируллаһал-ғәҙим», тип әйтергә, «Эй, Аллаһ! Минең гонаһтарымды ғәфү итеүеңде һорайым!» – тигәнде аңлата.

## Намаҙҙан һуң уҡыла торған доғалар һәм тәсбихтәр:

*Аллаһүммә әнтәссәләм үә минкәссәләм. Тәбәәрәктә йә зәлжәләәли үәл икраам.*

*Ғәлә рәсүүлинәә салауат.*

*(Аллаһүммә салли гәләә сәййидинә Мөхәммәдин үә гәләә әәли сәййидинә Мөхәммәд).* Эстән уҡырға.

*СүбхәнАллаһи үәлхәмдүлилләһи үә лә иләһә иллә Аллаһу үә Аллаһу әкбәр. Үә ләә хәулә үә лә ҡуүәтә иллә билләһил-галийил-гаҙыым.*

Бынан һуң «Әғүҙү билләһи минәш-шайтанир-ражим. Бисмилләәһи-ррахмәәни-ррахиим» тиергә һәм «АЯТЕЛ-КӨРСИ»ҙе уҡырға. Һуңынан ошо тәсбихтәр уҡыла:

| Тәсбихтәр | Мәғәнәһе |
|---|---|
| СүбхәнАллаһ (33 мәртәбә) | Аллаһ Тәғәләгә дан! |
| Әлхәмдүлилләһ (33 мәртәбә) | Аллаһы Тәғәләгә маҡтауҙар! |
| Аллаһу Әкбәр (33 мәртәбә) | Аллаһы Тәғәлә Бөйөк! |

*Аллаһу Әкбәр. Ләә иләәһә иллә Аллаһу вахдаһу ләә шәрикә ләһ. Ләһүл-мүлкү үә ләһүл-хәмдү үә һуүа гәләә күлли шәйин ҡадир*

## Намаҙҙан һуң уҡыла торған доға

*Әғүҙү билләһи минәш-шайтанир-ражим. Бисмилләәһи-ррахмәәни-ррахиим*

Ғаләмдәрҙең Раббыһы булған Аллаһты маҡтайым. Бәйғәмбәребеҙ хәҙрәте Мөхәммәд саллаллаһу гәләйһи үә сәлләмде, Уның ғаиләһен һәм Уға эйәргән сәхәбәләргә сәләм булһын.



Тик Аллаһты ғына беҙ данлайбыҙ, Унан ғына ярҙам, һаҡлау һәм ғәфү итеүен һорайбыҙ. Бары тик Ул – ярлыҡаусы һәм Ул үҙенә ышанғандарҙы Ҡиәмәт көнөндә ҡурсалар.



Эй! Аллаһым! Беҙҙең ғибәҙәттәребеҙҙе һәм ялбарыуҙарыбыҙҙы ҡабул ҡыл, әгәр улар камил булмаһалар ҙа.

Эй! Аллаһым! Беҙҙең гонаһтарыбыҙҙы ғәфү ит, ярлыҡа, беҙҙе ожмахҡа индер, йәһәннәм утынан һаҡла.

Эй! Аллаһым! Үҙеңә кәрәкле эштәрҙе беҙҙең өсөн еңел ҡыл!

Эй! Аллаһым! Исламға һәм мосолмандарға ярҙамыңды бир!

Эй! Аллаһым! Беҙҙе көфөрлөктән, мәжүсилектән, хәйерселектән һәм ҡәбер ғазабынан һаҡла!

Эй! Аллаһым! Беҙҙе оҙон ғүмерле, файҙалы ғилемле ит, донъя һәм әхирәттә бәрәкәтле ит.

(Был ваҡыт үҙебеҙгә кәрәкле нәмәләр һорап Аллаһҡа үтенәбеҙ).

Әй, Раббыбыҙ! Мине, әсәйемде, атайымды һәм бөтөн мосолманды Ҡиәмәт көнөндә рәхмәтең менән ғәфү әйлә. Әй, мәрхәмәтлеләрҙең иң мәрхәмәтлеһе!

Амин! Амин! Эй! Аллаһ Тәғәләм! Минең доғамды кире ҡаҡма, ҡабул ҡыл!

* * *

## ӨЙЛӘ НАМАҘЫН ҠЫЛЫУ ТӘРТИБЕ

Төшкө намаҙҙа (Өйлә, Әз-Зухр) 10 рәкәғәт: 4 рәкәғәт элекке сөннәт, 4 рәкәғәт фарыз, 2 рәкәғәт һуң сөннәт.

**Өйлә намаҙының тәүге 4 рәкәғәт сөннәте:** «Аллаһ Тәғәләнең ризалығы өсөн өйлә намаҙының тәүге сөннәтен ҡылырға ниәт ҡылдым», тип ниәтләнеп, иртәнге намаҙ һымаҡ, шул уҡ тәртиптә 2 рәкәғәт уҡыйһың. Шунан, ултырып «Әт-тәхиәт»те уҡыйһың. Һуңынан, «Аллаһу Әкбәр» тип әйтеп өсөнсө рәкәғәткә тораһың. Өсөнсө һәм дүртенсе рәкәғәт башында «Бисмилләәһи-ррахмәәни-ррахиим» тип, «Әл-Фатиха» сүрәһен, бер ҡыҫҡа аят, йә 3 аят уҡырға. Дүртенсе рәкәғәттән һуң ултырырға, «Әт-тәхиәт», «Аллаһүммә сәлли», «Аллаһүммә бәрик», «Раббәнә әтинә» доғалары уҡыла, сәләм бирелә.

**Өйлә намаҙының 4 рәкәғәт фарызы:** «Аллаһ Тәғәләнең ризалығы өсөн өйлә намаҙының фарызын ҡылыр өсөн ниәт иттем», тип ниәтләнәһең. Өйлә намаҙының сөннәте кеүек тәртиптә ҡылаһың, тик өсөнсө һәм дүртенсе рәкәғәттәрҙә «Әл-Фатиха» сүрәһен генә уҡырға. Башҡа сүрәләр һәм аяттар уҡылмай.

| 1-се рәкәғәт | 2-се рәкәғәт | 1-се ултырыш |
|---|---|---|
| Ҡамәт (ирҙәр өсөн) | Бисмилләһ | Әт-тәхиәт |
| Ниәт | Әл-Фатиха | |
| Тәкбир | Бер ҡыҫҡа сүрә | |
| Сүбхәнәкә | Рөкуғ | |
| Әғүҙү-Бисмилләһ | Сәждә | |

| | | |
|---|---|---|
| Әл-Фатиха | | |
| Бер ҡыҫҡа сүрә | | |
| Рөкүғ | | • |
| Сәждә | | |





| 3-се рәкәғәт | 4-се рәкәғәт | Һуңғы ултырыш |
|---|---|---|
| Бисмилләһ | Бисмилләһ | Әт-тәхиәт |
| Әл-Фатиха | Әл-Фатиха | Аллаһүммә салли |
| Рөкүғ | Рөкүғ | Аллаһүммә бәрик |
| Сәждә | Сәждә | Раббәнә |
| | | Сәләм |

**Иғтибар итегеҙ: Өйлә, икенде һәм йәстү намаҙҙарының фарыздары бер төрлө ҡылына.**

**Өйлә намаҙының һуңғы 2 рәкәғәт сөннәте:** «Аллаһ Тәғәләнең ризалығы өсөн өйлә намаҙының һуңғы сөннәтен ҡылырға ниәт иттем», тип ниәт әйтергә.

**Иғтибар итегеҙ:** Өйлә намаҙының һуңғы сөннәте иртәнге намаҙҙың сөннәте кеүек үк ҡылына. Аҡшам һәм йәстү намаҙҙарының сөннәттәре лә шулай уҡ ҡылына.

## ИКЕНДЕ НАМАҘЫНЫҢ ҠЫЛЫУ ТӘРТИБЕ

Төштән һуңғы (Икенде, Әл-Ғаср) намаҙында 8 рәкәғәт: 4 рәкәғәт сөннәт, 4 рәкәғәт фарыз.

**Икенде намаҙының 4 рәкәғәт сөннәте:** «Аллаһ Тәғәләнең ризалығы өсөн икенде намаҙының сөннәтен ҡылырға ниәт иттем», тип ниәт әйтергә. Өйлә намаҙының сөннәте кеүек үк ҡылына. Айырмаһы шунда, 2-се рәкәғәттә «Әт-тәхиәт» һуң «Аллаһүммә сәлли» һәм «Аллаһүммә бәрик» уҡыла. Һуңынан, «Аллаһу Әкбәр» тип әйтеп, өсөнсө рәкәғәткә тораһың. Өсөнсө рәкәғәт башында «Сүбхәнәкә», «Бисмилләәһи-ррахмәәни-ррахиим» тип, «Әл-Фатиха» сүрәһен, бер ҡыҫҡа аят, йә 3 аят уҡырға. Дүртенсе рәкәғәт башында «Бисмилләәһи-ррахмәәни-ррахиим» тип, «Әл-Фатиха» сүрәһен, бер ҡыҫҡа аят, йә 3 аят уҡырға.

**Икенде намаҙының 4 рәкәғәт фарызы:** «Аллаһ Тәғәләнең ризалығы өсөн икенде намаҙының фарызын ҡылырға ниәт иттем», тип ниәт әйтергә. Өйлә намаҙының фарызы кеүек үк ҡылына.

## АҠШАМ НАМАҘЫН ҠЫЛЫУ ТӘРТИБЕ

Киске намаҙ (Аҡшам, Әл-Мәғриб) намаҙы 5 рәкәғәт: 3 рәкәғәт фарыз, 2 рәкәғәт сөннәт.

**Аҡшам намаҙының 3 рәкәғәт фарызы:** «Аллаһ Тәғәләнең ризалығы өсөн аҡшам намаҙының фарызын ҡылырға ниәт иттем», тип ниәт әйтергә. Иртәнге намаҙҙағы кеүек үк ике рәкәғәт намаҙ ҡылырға. Һуңынан, «Аллаһу Әкбәр» тип әйтеп өсөнсө рәкәғәткә торорға. Өсөнсө рәкәғәттә «Бисмилләәһи-ррахмәәни-ррахиим» тип «Әл-Фатиха» сүрәһен уҡырға. 3-сө рәкәғәттең һуңында «Әт-тәхиәт», «Аллаһүммә сәлли», «Аллаһүммә бәрик», «Раббәнә әтинә» доғалары уҡыла һәм сәләм бирелә.

**Аҡшам намаҙының 2 рәкәғәт сәннәте:** «Аллаһ Тәғәләнең ризалығы өсөн аҡшам намаҙының сөннәтен ҡылыр өсөн ниәт иттем», тип ниәт әйтергә. Шулай уҡ, иртәнге намаҙҙың сөннәте кеүек ҡылына.

## ТӨНГӨ НАМАҘ ҠЫЛЫУ ТӘРТИБЕ

Төнгө намаҙҙа (Йәстү, Әл-Ишә) 13 рәкәғәт: 4 рәкәғәт элекке сөннәт, 4 рәкәғәт фарыз, 2 рәкәғәт һуң сөннәт, 3 рәкәғәт Витр намаҙы.

**Йәстү намаҙының 4 рәкәғәт элекке сөннәте:** «Аллаһ Тәғәләнең ризалығы өсөн йәстү намаҙының элекке сөннәтен ҡылыр өсөн ниәт иттем», тип ниәт әйтергә. Икенде намаҙының сөннәте кеүек ҡылына.

**Йәстү намаҙының 4 рәкәғәт фарызы:** «Аллаһ Тәғәләнең ризалығы өсөн йәстү намаҙының фарызын ҡылырға ниәт иттем», тип ниәт әйтергә. Шулай уҡ, өйлә һәм икенде намаҙҙарының фарызы кеүек ҡылына.

**Йәстү намаҙының 2 рәкәғәт һуң сөннәте:** «Аллаһ Тәғәләнең ризалығы өсөн йәстү намаҙының һуң сөннәтен ҡылырға ниәт иттем», тип ниәт әйтергә.

**Иғтибар итегеҙ:** Иртәнге намаҙҙың сөннәте, аҡшам һәм өйлә намаҙҙарының һуң сөннәттәре кеүек ҡылына.

## ВИТР НАМАҘЫ

Витр намаҙында 3 рәкәғәт.

**Витр намаҙының фарызы:** Башта иртәнге намаҙҙағы кеүек 2 рәкәғәт ҡылына. «Әт-тәхиәт» уҡыйың. Һуңынан, «Аллаһу Әкбәр» тип әйтеп өсөнсө рәкәғәткә тораһың.

Өсөнсө рәкәғәт башында «Бисмилләәһи-ррахмәәни-ррахиим» тип, «Әл-Фатиха» сүрәһен һәм бер ҡыҫҡа аят (йә 3 аят) уҡырға. Шунан, тәкбир әйтеп, шул уҡ ваҡытта ҡулдарҙы ҡолаҡ осона ҡәҙәр күтәрергә. Һуңынан, ҡулдарҙы кендек өҫтөнә ҡуйып, эстән «Ҡунут» доғаһын уҡырға. «Ҡунут» доғаһы китаптың һуңында бирелгән. Доғанан һуң рөкуғ, сәждә ҡылаһың һәм намаҙҙы ҡәҙимге тәртиптә тамамларға.

«Ҡунут» доғаһын белмәүселәр өс тапҡыр «Раббәнә ғфирли» доғаһын уҡыйҙар, ул да шулай уҡ китаптың һуңында «Раббәнә» доғыһында бирелгән.

## ВИТР НАМАҘЫН ҠЫЛЫУ ТӘРТИБЕ

| 1-се рәкәғәт | 2-се рәкәғәт | 1-се ултырыш |
|---|---|---|
| Ниәт | Бисмилләһ | Әт-тәхиәт |
| Тәкбир | Әл-Фатиха | |
| Сүбхәнәкә | Бер ҡыҫҡа сүрә | |
| Әғүҙү-Бисмилләһ | Рөкуғ | |
| Әл-Фатиха | Сәждә | |
| Бер ҡыҫҡа сүрә | | |
| Рөкуғ | | |
| Сәждә | | |

| 3-се рәҡәғәт | Тәкбир | Һуңғы ултырыш |
|---|---|---|
| Бисмилләһ | Тәкбир | Әт-тәхиәт |
| Әл-Фатиха | Ҡунут доғаһы | Аллаһүммә салли |
| Бер ҡыҫҡа сүрә | Рөкүғ | Аллаһүммә бәрик |
| | Сәждә | Раббәнә |
| | | Сәләм |





## НАМАҘ ФАРЫЗДАРЫ

Намаҙ фарыздары китаптың «32 фарыз» бүлегендә күрһәтелгән.

## НАМАҘЫ БОҘА ТОРҒАН ҒӘМӘЛДӘР

1 – Донъя ҡайғыһын йәки донъя эштәрен уйлап, йәки берәй ауырыу сәбәпле илау, «ах-вах» килеү.

2 – Ауырымаған килеш йүткерергә тырышыу.

3 – Берәй нәмәгә өрөү.

4 – Берәй кемгә яуап итеп аят уҡыу.

5 – Мәсих кейгәндең тәһәрәт ваҡыты үтеү.

6 – Эт, йә бесәй ҡыуып берәй нәмә әйтеү.
7– Ауыҙ тултырып ямғыр һыуы, ҡар йотоу.
8 – Ҡөрьәндең мәғәнәһе боҙола торған итеп яңылыш уҡыу.
9 – Ирҙәргә ҡатындар менән бер рәттә йә арттарында тороп намаҙ ҡылыу.
10 – Намаҙҙың бер рөкөнөндә өс тапҡыр бер үк урынды тырнау.
11 – Намаҙҙа ябылырға тейешле булған ерҙәрҙең асылыуы йә әйберҙең бысраныуы.
12 – Ерҙән аяҡтарҙы айырыу.
13 – Ҡатындарҙың күрем хәле башланыуы.
14 – Иртәнге намаҙ ваҡытында ҡояш ҡалҡыуы.
15 – Белә тороп, йә онотолоп һөйләшеү.
16 – Ашау йә эсеү.
17 – Көлөү. Янындағыларға ишетерлек итеп көлһә, тәһәрәте лә боҙола.
18 – Ҡәғбә тарафынан күкрәкте бороу.
19 – Намаҙҙан тыш нимәлер эшләү.

## СӘҺҮ СӘЖДӘҺЕ

**Сәһү сәждәһе** – ул намаҙ ваҡытында иғтибарһыҙлыҡтан, онотолоп киткәнлектән, йәки ялҡаулыҡ менән ебәрелгән бер ни тиклем хаталарҙы төҙәтеү өсөн ҡылынған сәждә.

***Сәһү сәждәһе өс осраҡта ҡылына:***

1 – Фарызды дөрөҫ ҡылмау.
2 – Үәжибте төшөрөп ҡалдырыу.
3 – Үәжибте дөрөҫ ҡылмау.

**Сәһү сәждәһе ошо рәүештә ҡылына:** Намаҙҙың һуңында, һуң ултырышында «Әт-тәхиәт»те уҡығас, ике тарафҡа ла сәләм биргәндән һуң ике сәждә ҡылырға кәрәк (йәмәғәт менән ҡылғанда уң яҡҡа ғына сәләм бирелә). Бынан һуң яңынан «Әт-тәхиәт», шунан, «Аллаһуммә сал-

ли», «Аллаһуммә барик» һәм «Раббәна атина» доғаларын уҡып, тәүҙә уңға, һуңынан һулға сәләм бирергә. Бынан һуң яңылышыу төҙәтелгән, тип иҫәпләнәсәк.

•

## «ӘЛ-ХӘШР» СҮРӘҺЕНЕҢ ҺУҢҒЫ ӨС АЯТЫ (ИРТӘНГЕ ҺӘМ КИСКЕ НАМАҘҘАРҘЫҢ ҺУҢЫНДА УҠЫУ ЯҠШЫРАҠ)

هُوَ اللَّهُ الَّذِي لَا إِلَهَ إِلَّا
هُوَ عَالِمُ الْغَيْبِ وَالشَّهَادَةِ هُوَ الرَّحْمَنُ الرَّحِيمُ ﴿٢٢﴾
هُوَ اللَّهُ الَّذِي لَا إِلَهَ إِلَّا هُوَ الْمَلِكُ الْقُدُّوسُ السَّلَامُ الْمُؤْمِنُ
الْمُهَيْمِنُ الْعَزِيزُ الْجَبَّارُ الْمُتَكَبِّرُ سُبْحَانَ اللَّهِ عَمَّا يُشْرِكُونَ ﴿٢٣﴾
هُوَ اللَّهُ الْخَالِقُ الْبَارِئُ الْمُصَوِّرُ لَهُ الْأَسْمَاءُ الْحُسْنَى
يُسَبِّحُ لَهُ مَا فِي السَّمَاوَاتِ وَالْأَرْضِ وَهُوَ
الْعَزِيزُ الْحَكِيمُ ﴿٢٤﴾

Бисмилләәһи-ррахмәәни-ррахиим.

Һүүә-Аллааһу-лләҙии ләә иләәһә илләә һүүә ғәәлимүл-ғайби үә-шшәһәәдәти һүүә-ррахмәәнү-ррахиим. Һүүә-ллааһу-лләҙии ләә иләәһә илләә һүүәл-мәликүл-ҡуддүүсү-ссәләәмүл-мүьминүл-мүһәйминүл-ғәзиизүл-джәббәәруль-мүтәкәббир. Сүбхәәнәллааһи ғәммәә йүшрикүүн. Һүүә-ллааһул-хааликуль-бәәриүл-мүсаууиру ләһүл-әсмәә үл-хүснәә йүсәббиху ләһү мәә фии-ссәмәәүә`ти үәлардыи үә һүүәл Ғәзиизүл-Хәкиим.

## «ӘЛ-БӘҠАРА» СҮРӘҺЕНЕҢ ҺУҢҒЫ ИКЕ АЯТЫ (ЙӘСТҮ НАМАҘЫНАН ҺУҢ УҠЫУ ЯҠШЫРАҠ)

آمَنَ الرَّسُولُ بِمَا أُنزِلَ إِلَيْهِ
مِن رَّبِّهِ وَالْمُؤْمِنُونَ كُلٌّ آمَنَ بِاللَّهِ وَمَلآئِكَتِهِ
وَكُتُبِهِ وَرُسُلِهِ لاَ نُفَرِّقُ بَيْنَ أَحَدٍ مِّن رُّسُلِهِ وَقَالُواْ سَمِعْنَا
وَأَطَعْنَا غُفْرَانَكَ رَبَّنَا وَإِلَيْكَ الْمَصِيرُ ﴿٢٨٥﴾ لاَ يُكَلِّفُ اللَّهُ نَفْساً
إِلاَّ وُسْعَهَا لَهَا مَا كَسَبَتْ وَعَلَيْهَا مَا اكْتَسَبَتْ رَبَّنَا لاَ تُؤَاخِذْنَا إِن
نَّسِينَا أَوْ أَخْطَأْنَا رَبَّنَا وَلاَ تَحْمِلْ عَلَيْنَا إِصْراً كَمَا حَمَلْتَهُ عَلَى
الَّذِينَ مِن قَبْلِنَا رَبَّنَا وَلاَ تُحَمِّلْنَا مَا لاَ طَاقَةَ لَنَا بِهِ وَاعْفُ
عَنَّا وَاغْفِرْ لَنَا وَارْحَمْنَا أَنتَ مَوْلاَنَا فَانصُرْنَا عَلَى
الْقَوْمِ الْكَافِرِينَ ﴿٢٨٦﴾

Бисмилләәһи-ррахмәәни-ррахиим.

Әәмәнә-ррасүүлү бимәә унзилә иләйһи мирраббиһи үәл-муьминүүн. Күллүн әәмәнә билләәһи үә мәләә-икәтиһи үә күтүбиһи үә русүлиһ. Ләә нүфәррику бәйнә әхәдим-мир русүлиһ үә ҡаалүү сәмиғнәә үә атағнәә ғуфраанәкә раббәнәә үә иләйкәл-масыиир. Ләә йүкәллифү-ллааһу нәфсән илләә үсғәһәә ләһәә мәә кәсәбәт үә ғәләйһәә мәктәсәбәт. Раббәнәә ләә түәәхиҙнәә ин нәсиинәә әү ахтаьнәә. Раббәнә үә ләә тәхмил ғәләйнәә исран кәмәә хәмәлтәһү ғәләәлләҙинә миң ҡаблинәә. Раббәнә үә ләә түхәммилнәә мәә ләә тааҡатә ләнәә биһ. Үәғфү ғәннәә уағфир ләнәә үәрхәмнәә. Әнтә мәүләәнәә фәнсурнәә ғәләл-ҡаумил-кәәфирииин.

**Йәмәғәт менән намаҙ уҡыуҙың өҫтөнлөктәре:** Йәмәғәт менән уҡылған намаҙ яңғыҙ ҡылған намаҙға ҡарағанда егерме биш тапҡырға сауаплыраҡ, ә икенсе хәдис буйынса – егерме ете тапҡырға. Шуның өсөн икәүләп һәм күберәк мосолмандар бергә булғанда йәмәғәт менән ҡылыу яҡшыраҡ.

## КӨНДӘЛЕК НАМАҘҒА ҠАҒЫЛМАҒАН НАМАҘҘАР

Йома намаҙы – өйлә ваҡытында уҡыла, бөтәһе 10 рәкәғәт. Өйлә намаҙының 4 рәкәғәте урынына йәмәғәт менән 2 рәкәғәт уҡыла.

Намаҙ ваҡыты еткәс 4 рәкәғәт сөннәт уҡыла, шунан, хөтбәнән һуң йәмәғәт менән 2 рәкәғәт уҡыла, һуңында 4 рәкәғәт сөннәт менән тамамлана.

**Йома намаҙы кемдәргә фарыҙ:**

1 – Ир-егеттәргә (ҡатын-ҡыҙҙарға фарыҙ түгел).

2 – Азат булғандарға.

3 – Мосафир булмағандарға.

4 – Һау-сәләмәт булғандарға.

5 – Күҙҙәре күргәндәргә.

6 – Мәсеткә барыу өсөн ҡаршылыҡтары булмағандарға.

**Йома намаҙы дөрөҫ булһын өсөн кәрәкле шарттар бар:**

1 – Йома намаҙын өйлә ваҡытында ҡылыу.

2 – Намаҙҙан алда хөтбә уҡылыуы.

3 – Йома намаҙын ҡылған ер һәр теләгән кеше өсөн асыҡ булыуы.

4– Имамдан башҡа иң аҙ тигәндә өс кеше йәмәғәт булыуы. Абу Йософ фекере буйынса ике ир булыуы ла етә.

5 – Йома намаҙын ҡылыу өсөн мөфтөйҙән рөхсәте булыуы.

6 – Йома намаҙы ҡылынасаҡ ерҙең ауыл йәки ҡала хөкөмөндә булыуы.

## Байрам намаҙҙары:

Йома намаҙы фарыз булған ирҙәргә йылына ике тапкыр байрам намаҙҙарын ҡылыу үәжиб һанала.

Байрам намаҙы ике рәкәғәт була һәм йәмәғәт менән ҡылына. Байрам намаҙы ҡояш ҡалҡҡандан һуң 45 минут – 1 сәғәт үткәс башлана. Намаҙ ваҡыты еткәс, йәмәғәт, имам артына баҫып, «Байрам намаҙы (үәжиб) ҡылырға ниәт иттем, ойоном имамға» – тип ниәт ҡыла.

## Юлсы (мосафир) намаҙы:

Кем 90 саҡырымлыҡ юл үтергә ниәте булып (йәйәү уртаса тиҙлек менән 18 сәғәтлек, йә 3 көнлөк йәйәүле юлға), үҙенең йәшәгән еренән юлға сыҡкан кешегә юлсы тиҙәр.

Киткән ерендә 15 көндән артыҡ булһа, ул мосафир һаналмай, әгәр 15 көндән аҙыраҡ ҡалһа – мосафир булып һаналыр. Ул шул уҡ көндө, йә иртәгеһенә ҡайтырға ниәт ҡылһа, ул юлсы һаналыр, был ниәтен ун йыл буйы яңыртып торһа ла.

Юлсыға дүрт рәкәғәт фарыз намаҙын ике рәкәғәт фарыз итеп ҡылырға. 3 һәм 2 рәкәғәтле фарыз намаҙҙар ҡыҫҡартылмай. Сәфәр дауамында, уңайлы урын булһа, сөннәттәрен дә ҡыҫҡартмай уҡый ала.

* * *

# ИСЛАМҒА ИЛТКӘН ҠАПҠАЛАР

*«Кәлимәи Тәүхид һәм Кәлимәи Шәһәҙәт»*



**Нисек мосолман булырға?**

Әгәр кеше йөрәге менән ышанып «Кәлимәи Тәүхид һәм Кәлимәи Шәһәҙәт»те тел менән әйтһә мосолман була.

**Исламдың нигеҙе нимә?**

Ул - **«КӘЛИМӘИ ТӘҮХИД»:**

***«Лә иләәһә иллә Аллаһ, Мәхәммәдүр-рәсүүлүллаһ».***

**Мәғәнәһе:** *«Аллаһтан башҡа илаһ юҡ, һәм Мөхәммәд (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) – Аллаһтың рәсүле».*

**Аллаһты – «илаһ» тип атарға ярамай:** Аллаһтың исеме менән бер нәмә лә, бер кем дә атала алмай. Шулай уҡ, бер нәмәгә лә, бер кемгә лә табынырға ярамай. Һәм Аллаһтың исеме илаһ тип тәржемә ителә алмай.

***Лә иләәһә:*** бер ниндәй ҙә илаһты ҡабул итмәйем һәм йөрәгемде уларҙан таҙартам, тип һүҙ бирәм. Төрлө илаһтарҙан арынған йөрәгемде бары тик Бер Аллаһ һәм Уның дине өсөн әҙерләнем. Ауырыу йөрәктә иман нығый алмай, һаҙлыҡҡа өй һалып булмаған кеүек.

**Иллә Аллаһ:** алдыҡ илаһтарҙан баш тартып, Бер Аллаһты ғына ҡабул итәм.

**Мәхәммәдур-рәсүлүллаһ:** Төрлө яңылыҡтарҙан (биҙғаларҙан) баш тартам, үҙ Раббыма ғына ғибәҙәт ҡыласаҡмын, нисек Изге Ҡөрьән аша Аллаһ ҡушҡан, һәм Аллаһ рәсүлен *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)* өйрәткәнсә һәм беҙҙе рәсүл *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)* нисек өйрәткән.

## КӘЛИМӘИ-ШӘҺӘДӘТ

***«Әшһәдү әлләә иләәһә иллә Аллааһү үә әшһәдү әннә Мөхәммәдән гәбдүһүү үә рәсүүлүһ».***

**Мәғәнәһе:** *«Аллаһтан башҡа һис бер тәңре юҡ. Хәҙрәти Мөхәммәд Уның ҡоло һәм Илсеһе икәнлегенә таныҡлыҡ бирәм».*

**Әшһәду әлләә иләәһә иллә Аллааһ:** *«Төшөнәм, аңлайым, йөрәгем менән ҡабул итәм һәм телем менән әйтәм: «Аллаһтан башҡа илаһ юҡ. Кемгә улар табыналар, Унан башҡа, ғаләм һәм кешеләр өсөн закон урынлаштырған көс юҡ. Үҙен Аллаһҡа тыңлаусенән баш тартам һәм инҡар итәм».*

## АЛЛАҺҠА ИНАНЫУ

### ХИКӘЙӘ:

**Аллаһ беҙҙе күрә.**

Сәлих үҙенең олатаһынан:

– Олатай, ә ни өсөн беҙ Аллаһ Тәғәләне күрмәйбеҙ? – тип һораны.

– Сөнки беҙҙең күҙҙәр шул рәүешле төҙөлгән, шуға улар Аллаһты күрмәй, - тине олатаһы.

– Нисек инде улай, олатай?

– Ә һин фотоаппарат менән бөтә нәмәне төшөрә алаһыңмы?

– Эйе, төшөрә алам.

– Ә үҙеңдең йөрәгеңде, үпкәләреңде лә төшөрә алаһыңмы?

– Юҡ, уларҙы тик ренген аппараты менән генә төшөрөп була.

– Бына күрәһеңме, ике аппарат та төшөрөр өсөн эшләнелгән, тик фотоаппарат ренген аппараты төшөргәнде төшөрә алмай. Сөнки уларҙың конструкциялары төрлө. Беҙҙең күҙҙәребеҙ ҙә шулай, Уны күрмәҫлек итеп төҙөлгән.

– Ә Ул беҙҙе күрәме?

– Әлбиттә, Ул беҙҙе ҡараңғы, утһыҙ бүлмәлә лә, беҙ ҡара кейемдә булһаҡ та күрә.

## АЛЛАҺТЫҢ СИФАТТАРЫ

***А – Зати сифаттары, Б – Субути сифаттары***

***А – Зати сифаттары (Уға ғына хас). Улар алты:***

**1 – Әл-Вуджуд:** Бар булыуын белдерә. Аллаһы Тәғәлә һәр ваҡыт бар, һәм Уның ихтыяры бөтә ерҙә.

**2 – Әл-Кидам:** барлығының башланғысы юҡлығын белдерә. Аллаһ Тәғәлә Ул һәр ваҡыт булған. Ул тыуҙырылмаған.

**3 – Әл-Баҡа:** Мәңгелек бар булыуҙы белдерә. Аллаһ Тәғәләнең булыуының һуңы юҡ. Ул үлемһеҙ.

**4 – Әл-Вахданийййат:** Берлеген белдерә. Бер нәмә лә, бер кем дә лә Аллаһта булған атрибуттар юҡ. Аллаһ Тәғәләгә

тиң булған һәм тиңдәш булған һис бер нәмә лә юҡ.

**5 – Мухалафатул-лил-хауадис:** барлыҡҡа килтерелгәндәрҙән айырыуын белдерә. Аллаһ Тәғәлә Үҙе барлыҡҡа килтергән бер нәмәгә лә оҡшамаған.

**6 – Әл-Ҡыям би Нафсиһи (Ҡыям би Затиһи):** Үҙенән үҙе барлыҡты белдерә. Аллаһ Тәғәлә Үҙенән үҙе бар һәм Ул бер нәмәгә лә мохтаж түгел. Тик бөтә Уның тарафынан барлыҡҡа килтерелгәндәр Уға мохтаж.

*Б – Субути сифаттары: Улар һигеҙ:*

**1 – Әл-Хәйй:** Тере булыуҙы белдерә. Аллаһ Тәғәлә тере һәм Унда йәшәү бар.

**2 – Әл-Ғилем:** Белемле булыуҙы белдерә. Аллаһ Тәғәлә бар нәмәне белә.

**3 – Әс-Самиғ:** Ишетеүҙе белдерә. Аллаһ Тәғәлә бөтә нәмәне ишетә.

**4 – Әл-Басир:** Күреүҙе белдерә. Аллаһ Тәғәлә бөтә нәмәне күрә.

**5 – Әл-Ирада:** Нимәнелер теләүҙе белдерә. Аллаһ Тәғәлә Үҙенең теләктәрендә һәм ирекле.

**6 – Әл-Ҡөҙрәт:** Ҡеүәтте белдерә. Аллаһ Тәғәләнең көсө һәм ҡеүәте барлыҡҡа килтерелгәндәрҙең барыһы өҫтөнән дә хаҡимлыҡ итә.

**7 – Әл-Ҡәләм:** Һөйләүҙе белдерә. Аллаһ Тәғәлә кем менән теләй һәм нindәй ысул менән теләй, шулай һөйләшә.

**8 – Әт-Таҡуин:** Барлыҡҡа килтереүҙе белдерә. Ерҙә һәм күктәрҙә булған бар нәмәне Аллаһ Тәғәлә барлыҡҡа килтергән.

* * *

## АЛЛАҺТЫҢ СИФАТТАРЫ ХАҠЫНДА ҺОРАУҘАР

| | |
|---|---|
| Кем һине барлыҡҡа килтергән? | АЛЛАҺ |
| Кем бөтә нәмәне күрә? | ……….. |
| Кем бөтә нәмәне ишетә? | ……….. |
| Кем бөтә нәмәне белә? | ……….. |
| Кем бөтәһен дә ризыҡ менән тәьмин итә? | ……….. |
| Кем бөтә нәмәне лә булдыра ала? | ……….. |
| Кемдең ихтияры бөтә ерҙә лә? | АЛЛАҺТЫҢ |
| Кем башланғысһыҙ бар? | ……….. |
| Кемдең барлығының һуңы юҡ? | АЛЛАҺТЫҢ |
| Кемдең тиңе юҡ? | АЛЛАҺТЫҢ |
| Кемдең оҡшашы юҡ? | АЛЛАҺТЫҢ |
| Кем бер кемгә лә мохтаж түгел? | ……….. |
| Кем үлемһеҙ? | ……….. |
| Кемдең көсөнөң сиге юҡ? | АЛЛАҺТЫҢ |
| Кем тыумаған һәм тыуҙырылмаған? | ……….. |
| Кем беҙҙе һаҡлай? | ……….. |
| Кем беҙҙе ғәфү итә? | ……….. |
| Кем беҙгә ғүмер бирә? | ……….. |
| Раббың кем һинең? | ……….. |
| Кем иң Бөйөгө? | ……….. |
| Кем иң гүзәле? | ……….. |
| Кем иң һөйөклөһө? | ……….. |
| Кемдән беҙ ярҙам һорайбыҙ? | АЛЛАҺТАН |
| Ҡурҡҡан саҡта беҙ кемгә мөрәжәғәт итәбеҙ? | АЛЛАҺҠА |
| Кем беҙҙе бәлә-ҡазаларҙан һаҡлай? | ……….. |

## БӨТӨН БУЛҒАНДЫ АЛЛАҺ БАР ҠЫЛҒАН

| | |
|---|---|
| Кем был донъяны барлыҡҡа килтергән? | АЛЛАҺ |
| Кем йондоҙҙарҙы барлыҡҡа килтергән? | ……….. |
| Кем айҙы барлыҡҡа килтергән? | ……….. |
| Кем ҡояшты барлыҡҡа килтергән? | ……….. |
| Кем ерҙе, күкте, һауаны бар ҡылған? | ……….. |
| Кем күктә йондоҙҙарҙы тотоп тора? | ……….. |
| Кем ергә ямғыр яуҙыра? | ……….. |
| Кем кешене юҡтан бар ҡылған? | ……….. |
| Кем мине барлыҡҡа килтергән? | ……….. |
| Кем атайым, әсәйемде барлыҡҡа килтергән? | ……….. |
| Кем хайуандарҙы барлыҡҡа килтергән? | ……….. |
| Кем үҫемлектәрҙе барлыҡҡа килтергән? | ……….. |
| Кем тауҙарҙы барлыҡҡа килтергән? | ……….. |
| Кем емеш-еләкте барлыҡҡа килтергән? | ……….. |
| Кем ризыҡ һәм башҡа кәрәк-яраҡты бирә? | ……….. |
| Кем үле ерҙән тере үҫемлектәр үҫтереп сығара? | ……….. |
| Кем бер тамырҙан төрлө сәскә һәм еҫтәр сығара? | ……….. |
| Кем ғүмерҙәребеҙҙе ала? | ……….. |
| Кем бөтә нәмәне барлыҡҡа килтерә? | ……….. |
| Был ғаләмдәр кемдеке? | АЛЛАҺТЫҠЫ |

## АЛЛАҺ ТӘҒӘЛӘБЕҘ АЛДЫНДА ЙӨКЛӘМӘЛӘРЕБЕҘ:

1 – Беҙ берҙән-бер Аллаһ Тәғәләгә генә ышанырға тейешбеҙ, уға тиңдәш бирмәй.

2 – Бөтә йәнебеҙ менән башҡаларҙан нығыраҡ Аллаһты ғына яратырға тейешбеҙ.

3 – Гонаһтарыбыҙҙан Аллаһҡа ғына һыйынып, Унан ярлыҡау һорарға тейешбеҙ.

4 – Аллаға ғына өмөт итеп, Унан ғына ярҙам һорарға тейешбеҙ.

5 – Һәр ваҡыт тик Аллаһҡа ғына ғибәҙәт ҡылырға те-

йешбеҙ.

6 – Аллаһ биргән бөтә нәмәгә рәхмәтле булырға тейешбеҙ.

7 – Аллаһ ятратканды яратып, Ул һөймәгәнде беҙ ҙә һөймәҫкә тейешбеҙ.

8 – Аллаһ ҡушҡандарҙы үтәргә, Ул тыйғандан беҙ ҙә тыйылырға, харамдан йыраҡ булырға тейешбеҙ.

## ХИКӘЙӘ:

**Аллаһ Тәғәләнең барлығын инкар иткән бер тәккәбер кешегә Имам Әғзәм Әбү Хәнифәнең яуабы:**

Боронғо заманда Бағдад ҡалаһында бер бик билдәле кеше йәшәгән. Уның исеме Имам Әғзәм Әбү Хәнифә булған. Ул бөйөк ғалим булып, һәм уның бик күп уҡыусылары булған. Халыҡ араһында оло хөрмәт ҡаҙанған.

Шул уҡ ваҡытта, үҙен бөтә һорауҙарҙа белдекле һанаған бер тәккәбер бәндә йәшәгән. Ул Аллаһ юҡ тип иҫәпләгән, һәм ҡайҙа барһа ла ошо хаҡта бәхәс күтәргән.

Был һауалы бәндә Әбү Хәнифә хаҡында белеп ҡалған да, уның менән бәхәсләшәһе килеп киткән. Бағдатҡа килеп, Әбү Хәнифәне табып, шул уҡ һорауын биргән: «Аллаһ бармы, йә юҡмы?»

Әбү Хәнифә яуап бирмәгән, тик иртәгеһенә тейешле ваҡытҡа, билдәләнгән урынға килергә ҡушып, һәм шунда яуап аласағын әйткән.

Билдәле булыуынса, ҡаланы икегә бүлеп, Бағдад аша Тигр йылғаһы аға.

Икенсе көндө, биләдәнгән ваҡытта Әбү Хәнифә килмәгән. Тәккәбер бәндә уны бик оҙаҡ көткән һәм инде ҡайтырға йыйынғанда, Әбү Хәнифә килеп сыҡҡан. Тәккәбер: «Ниңә һин һуңланың? Бәлки, минең менән бәхәсләшергә ҡурҡаһыңдыр!»

Әбү Хәнифә уға:

- Юҡ, ҡурҡмайым. Һин бит беләһең, мин ҡаланың теге яғында, йылға аша йәшәгәнде. Төндә дауыл йылғалағы

күперҙе ағыҙып алып киткән. Мин йылғаға етер саҡта, күпер эшсе, төҙөүсе һәм инженерҙарһыҙ үҙе төҙөлһөн, тип теләнем. Ағас һәм таштарға үҙҙәре күпер булып төҙөлһөн өсөн бойороҡ бирҙем. Әлбиттә, был бер ни тиклем ваҡытты алды һәм мин бер аҙ һуңланым, әммә барыбер бында килдем, ти.

Тәккәбер:

- Һин алдатаһың. Нисек инде күпер үҙ алдына, эшсе, төҙөүсе һәм инженерҙарһыҙ үҙе төҙөлһөн ти. Быға аҡылдан яҙған ғына ышаныр.

Әбү Хәнифә уға:

- Уян, кеше! Һин күпер үҙ алдына төҙөлмәй, тип иҫбатлайһың. Нисек һинеңсә, ошо ғәләм үҙенән-үҙе төҙөлгәнме? Бит ағас япрағы ла үҙ алдына һелкә алмай. Ә һин әле һаман, бер нәмә лә үҙ алдына, сәбәпһеҙ бар булмағанын аңлай алмайың, - тип кафыр тәккәберҙе уйға һалған.

## ФӘРЕШТӘЛӘРГӘ ЫШАНЫУ

**Фәрештәләрҙең айырмалы сифаттары:**

а) Фәрештәләр – Аллаһтың нурҙан яратылған ҡолдары. Улар гонаһһыҙ, нәфсеһеҙ, енесһеҙ һәм ашау-эсеүгә мохтаж түгел.

б) Фәрештәләр күҙгә күренмәй.

в) Фәрештәләр йәшерен ғилемде белмәй. Аллаһ Тәғәлә нимә тапшыра шуны ғына беләләр.

**Фәрештәләрҙең вазифалары:**

Фәрештәләрҙең йөкләмәләре – Аллаһ Тәғәлә һис бер туҡтауһыҙ ғибәҙәт ҡылып, данлап һәм Уның ҡушҡандарын үтәп, тороу.

**Иң мәшһүр фәрештәләрҙең вазифалары:**

**1 – Ябраил** *(ғәләйһиссәләм)* – Бәйғәмбәрҙәргә изге хәбәр һәм Изге яҙмалар килтереп торған.

**2 – Микаил** *(ғәләйһиссәләм)* **–** ямғыр, ел һ. б. тәбиғәт күренештәре менән эш итә.

**3 – Исрафил** *(ғәләйһиссәләм)* **–** Аллаһ Тәғәлә бойороуы буйынса сурға (борғоға) өрөп, Ҡиәмәт көнөн иғлан итәсәк.

**4 – Ғазраил** *(ғәләйһиссәләм)* **–** үлем килтереп, беҙҙең йәндәребеҙҙе алыусы фәрештә.

Былар фәрештәләрҙән иң бөйектәре. Аллаһ Тәғәлә улар аша бойороҡтарын башҡа фәрештәләргә еткерә.

**Башҡа фәрештәләрҙең вазифалары:**

**Кираман-Кәтибин:** һәр ваҡыт кешеләргә юлдаш булған фәрештәләр. Улар әҙәмдең уң һәм һул яғында булып, әйткән һәр бер һүҙҙе һәм ғәмәлде яҙып алып торалар. Уң яҡтағы фәрештә яҡшы ғәмәлдәребеҙҙе яҙа, һул яҡтағыһы гонаһлыларын теркәп бара. Улар яҙып барған ғәмәлдәребеҙ дәфтәрен беҙгә Яуап көнөндә һорау алғанда тотторасаҡтар.

**Мөнкир менән Нәнкир:** Улар беҙҙән ҡәберҙә һорау аласаҡ.

## ХИКӘЙӘ:

**Нисек Ғазраил** *(ғәләйһиссәләм)* **фәрештә бер үк ваҡытта меңәрләгән кешенең йәндәрен ала ала?**

Әйҙәгеҙ беҙ йәндәребеҙҙе янып торған электр лампаһы рәүешендә күҙ алдына килтерәйек, ә үлемде – уны һүндереү, тип. Беҙҙең йорттарыбыҙға ингән бөтә электр сымдары бер электостанцияға берләшкән. Ә хәҙер күҙ алдына килтерегеҙ, әгәр ҙә шунда эшләгән инженер үҙенең эшсеһенә ҡаланың бер районында ут һүндерергә ҡушһа, нимә булыр ине? Эшсе был бойороҡто үтәһә, шул уҡ ваҡытта меңәрләгән өйҙә ут һүнәсәк.

Шулай уҡ, беҙҙең йәндәребеҙ ҙә, күҙгә күренмәгән сымдар менән Ғазраил *(ғәләйһиссәләм)* ихтиярында булған бер кнопкаға тоташтырылған. Уның бармағының бер ишараһы менән шунда уҡ меңәрләгән йәндәр үҙ тәндәренән

сығасаҡтар. Тағы Ғазраил *(ғәләйһиссәләм)*деӊ ҡул аҫтында миллионлаған башҡа фәрештәләр бар. Шуға, Ғазраил *(ғәләйһиссәләм)* бойороғо буйынса, бер үк ваҡытта йөҙәр меӊ тере йәндәрҙеӊ йәнен алыуҙа һис бер ниндәй проблема юҡ.

## ИЗГЕ ЯҘМАЛАРҒА (КИТАПТАРҒА) ЫШАНЫУ

**Изге яҙмалар** – Аллаһ Тәғәлә тарафынан бәйғәмбәрҙәргә ебәрелгән изге яҙмалар ул.

**Вәхи** – Аллаһ Тәғәлә тарафынан Ябраил (ғәләйһиссәләм) фәрештә аша рухи юл менән бәйғәмбәрҙәргә ебәрелгән белем. Вәхи тик бәйғәмбәрҙәргә генә бирелә.

Изге яҙмаларҙыӊ ҡайһы бере бер нисә биттән генә тора, ул ҡағыҙҙар сухуф, тип аталалар. Улар:

**Әҙәм** *(ғәләйһиссәләм)* бәйғәмбәргә – 10 сухуф,

**Шис** *(ғәләйһиссәләм)* бәйғәмбәргә – 50 сухуф,

**Иҙрис** *(ғәләйһиссәләм)* бәйғәмбәргә – 30 сухуф,

**Ибраһим** *(ғәләйһиссәләм)* бәйғәмбәргә – 10 сухуф тапшырылған. Тик уларҙыӊ береһе лә һаҡланып ҡалмаған.

**Изге яҙмалар 4 китап:**

**1 – Ат-Тәүрәт:** Муса *(ғәләйһиссәләм)* бәйғәмбәргә ебәрелгән, һуӊынан ул кешеләр тарафынан үҙгәртелгән.

**2 – Әз-Зәбүр:** Дауыт *(ғәләйһиссәләм)* бәйғәмбәргә ебәрелгән, һуӊынан ул кешеләр тарафынан үҙгәртелгән.

**3 – Әл-Инжил:** Ғайса *(ғәләйһиссәләм)* бәйғәмбәргә ебәрелгән, һуӊынан ул кешеләр тарафынан үҙгәртелгән.

**4 – Изге Ҡөрьән:** Аллаһ Тәғәлә тарафынан Мөхәммәд

бәйғәмбәргә *(саллаллаһу ғәләйһи вә сәллам)* Ябраил фәрештә аша ебәрелгән. Аллаһ Тәғәлә тарафынан ебәрелгән Изге яҙмаларҙан һис үҙгәртелмәй һаҡланған берҙән бер китап.

Беҙҙең көндәрҙә, ҡайһы бер наҙан мосолмандар Изге Ҡөрьәнде үлгәндәр өсөн генә кәрәк, ҡәбергә һәм төрбәләргә барғанда ғына, тип иҫәпләйҙәр. Шулай уҡ, уның тулы мәғәнәһен аңламаған ауырыуҙарға уҡыу өсөн кәрәк, тиҙәр.

Изге Ҡөрьәндә мосолмандарға тыуғандан алып үлгәнсе кәрәк булған, Аллаһ Тәғәлә тарафынан урынлаштырылған бөтә канун һәм ҡағиҙәләр бар. Мосолман бар ғүмере буйы, тормошоноң һәр өлкәһендә лә Изге Ҡөрьән кәңәштәренә таянып йәшәргә тейеш.

Ҡөрьән 23 йыл буйы ебәрелә килеп, 114 бүлек-сүрәнән һәм 6666 аяттан тора.

## БӘЙҒӘМБӘРҘӘРГӘ ЫШАНЫУ

**Бәйғәмбәрҙәр** – улар һайланылған кешеләр; Аллаһ Тәғәләнең белемен кешеләргә еткереүселәр.

Бәйғәмбәрҙәр мотлаҡ түбәндәге сифат эйәләре булырға тейеш:

**1 – Сидыҡ:** Бәйғәмбәрҙәр иң юғары кимәлдәге дөрөҫ һәм ғәҙел кешеләр.

**2 – Аманат:** Бәйғәмбәрҙәр бар мөнәсәббәттәрҙә лә тоғро.

**3 – Таблиғ:** Бәйғәмбәрҙәр Аллаһ Тәғәләнән ебәрелгән саҡырыу һәм закондарҙы тулы кимәлдә кешеләргә еткерә.

**4 – Фатанат:** Бәйғәмбәрҙәр асыҡ зиһенле һәм ныҡ үҫешкән аҡыллы булалар.

**5 – Исмат:** Бәйғәмбәрҙәр гонаһ ҡылмай.

**Бәйғәмбәрҙәр һаны:**

Беренсе бәйғәмбәр – Әҙәм *(ғәләйһиссәләм)*, һуңғыһы – Мөхәммәд *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)*. Улар араһында бик күп бәйғәмбәрҙәр булған. Бөтә бәйғәмбәрҙәр ҙә бер Аллаһ Тәғәләгә генә буйһонорға һәм ғибәҙәт ҡылырға саҡырғандар. Әммә, бәйғәмбәрҙәрҙең вафатынан һуң, бәндәләр икенсе илаһтарға табына башлар булғандар, шунан, уларға Раббыбыҙ яғынан бәйғәмбәр ебәрер булған.

**Ҡөрьәндә бәйғәмбәрҙәрҙең егерме бишеһенең исеме әйтелгән.** Улар 25:

| | | | |
|---|---|---|---|
| Әҙәм *(ғәләйһиссәләм)* | Ибраһим *(ғәләйһиссәләм)* | Муса *(ғәләйһиссәләм)* | Йонос *(ғәләйһиссәләм)* |
| Иҙрис *(ғәләйһиссәләм)* | Исмәғил *(ғәләйһиссәләм)* | Харун *(ғәләйһиссәләм)* | Илъяс *(ғәләйһиссәләм)* |
| Нух *(ғәләйһиссәләм)* | Исхаҡ *(ғәләйһиссәләм)* | Дауыт *(ғәләйһиссәләм)* | Әл-Ясағ *(ғәләйһиссәләм)* |
| Һуд *(ғәләйһиссәләм)* | Яҡуп *(ғәләйһиссәләм)* | Сөләймән *(ғәләйһиссәләм)* | Зәкәриә *(ғәләйһиссәләм)* |
| Салих *(ғәләйһиссәләм)* | Йософ *(ғәләйһиссәләм)* | Әйүп *(ғәләйһиссәләм)* | Яхъя *(ғәләйһиссәләм)* |
| Лут *(ғәләйһиссәләм)* | Шөғәйеп *(ғәләйһиссәләм)* | Зөлҡәфил *(ғәләйһиссәләм)* | Ғайса *(ғәләйһиссәләм)* |
| Мөхәммәд бәйғәмбәр *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)* | | | |

**МӨҒЖИЗӘ -** Бәйғәмбәрҙәр *(ғәләйһиссәләм)* күрһәткән ғәҙәттән тыш күренеш, кәрәмәт. Уларҙың бәйғәмбәрлеген дәлилләү өсөн, Аллаһ Тәғәләнең ихтыяры һәм теләге буйынса күрһәтелгән. Кешеләр Аллаһтың ярҙамынан башҡа ундайҙы эшләй алмай.

# ҠИӘМӘТ КӨНӨНӘ ЫШАНЫУ

Бер көн Исрафил *(ғәләйһиссәләм)* фәрештә Аллаһ Тәғәлә бойороғо буйынса сурына өрәсәк, һәм бөтә йән эйәләре лә вафат булырына ышаныу. Был ваҡытты, кешеләр терелгәндән алып, ожмах әһелдәре – ожмахҡа, һәм тамуҡ әһелдәре – тамуҡҡа ингән көндө «Ҡиәмәт көнө» (ҡиәмәт) тиҙәр.

Икенсе фекер буйынса, кешеләр ерҙәге тормошта ҡылған ғәмәлдәре өсөн яуап бирергә терелгәндән алып, уларҙың мәңгелек йәшәйеше «Ҡиәмәт көнө», тип атала. Был ваҡытты бик күп атама менән атайҙар, иң киң билдәлеһе – «Ахырызаман» (заман ахыры).

**Ҡәберҙәге тормош.** Кешенең үлгәндән алып терелгәнгә хәтлемге тормошо – ҡәбер тормошо, тип атала. Мәрхүмде күмгәс тә уға ике фәрештә килә һәм һорауҙар бирә башлайҙар: «Кем һинең Раббың? Кем һинең бәйғәмбәрең? Һин ҡайһы диндән? һ. б.» Был ҡәберҙә һорау алыу, тип атала. Был һорауҙарға бөтә кешеләр ҙә тарттырыла, хатта ул янып бер ус көл генә булып ҡалһа ла. Ҡәберҙәге тормош – ул Ҡиәмәт көнөнөң бер өлөшө булып тора. Ожмахҡа инәсәк кешеләр ҡәберҙә үк йәннәт ишеге алдында һымаҡ йәшәйәсәктәр, ә тамуҡҡа инәсәк бәндәләр, ҡәберҙә үк ғазап кисерә башлайҙар.

Ҡәберҙәге тормошто ерҙәге тормош менән сағыштырырға ярамай. Ҡәберҙәге кешенең хәле бер ни тиклем йоҡо хәленә оҡшаш.

**Ожмах (Йәннәт)** – был мөьмин мосолмандар өсөн әҙерләнгән бүләк. Ҡөрьәндең бер аятында Аллаһ Тәғәлә әйтә: **«Улар өсөн унда нимә теләйҙәр – шул бар, һәм беҙҙән тағы өҫтәләсәк«**(Әл-Кәһф, 35).

**Тамуҡ (Йәһәннәм):** Аллаһ Тәғәлә тарафынан әҙерләнгән яза, Уны тыңламағандары өсөн. Унда кафырҙар һәм ике йөҙлөләр, шулай уҡ яҡшы ғәмәлдәренә ҡарағанда гонаһтары

күберәк булған мосолмандар буласаҡ. Гонаһлы мосолмандар, тейешле язаларын алғас, тамуҡтан сығасаҡ, ә кафырҙар, икейөҙлөләр һәм мөжүсиҙәр унда мәңге ҡаласаҡ.

**Йыйылыу (Мәхшәр):** Исрафил *(ғәләйһиссәләм)* фәрештә беренсе тапҡыр сурына өргәс, Аллаһ Тәғәләнән башҡа бөтә йән эйәләре лә вафат буласаҡ. Шулай бер ни тиклем ваҡыт буласаҡ, һуңынан Аллаһ Тәғәлә Исрафил *(ғәләйһиссәләм)* фәрештәне терелтәсәк. Исрафил *(ғәләйһиссәләм)* фәрештә икенсе тапҡыр сурына өрәсәк, һәм бөтә кешеләр ҙә тереләсәк һәм Мәхшәр майҙанына яуап биреү өсөн йыйыласаҡ.

**Ғәмәл дәфтәре:** Мәхшәр майҙанында кешеләрҙең ҡулдарына ғәмәл дәфтәрҙәрен тотторасаҡтар. Унда фәрештәләр кешеләрҙең ерҙә йәшәгән саҡтарында бөтә ғәмәлдәрен яҙып барған. Ожмах әһелдәренә ул – уң ҡулдарына, тамуҡҡа лайыҡтарға – һул ҡулдарына тоттороласаҡ.

**Яуап (Хисаб):** Аллаһ Тәғәлә бер үк ваҡытта бөтәһенән дә ерҙәге ғүмерҙәре өсөн яуап һораясаҡ. Һәр кем үҙ эштәре өсөн яуап бирәсәк. Бәйғәмбәр *(ғәләйһиссәләм)* әйткән, бер кем дә ошо һорауҙарға яуап бирмәй тороп үҙ урынынан ҡуҙғалмаясаҡ:

1 – Үҙ ғүмереңде нәмәгә арнаның?
2 – Һиңә бирелгән белемде нимәгә тотондоң?
3 – Нисек үҙеңә ризыҡ таба инең? Улар рөхсәт ителгән (хәләл) инеме, йә тыйылған (харам) булдымы?
4 – Үҙеңә бирелгән тәнде ниндәй юлда файҙаландың: Аллаһҡа яҡынайған юлдамы, йә Уның тарафынан тыйылған юлдамы?

**Үлсәү (Мизан):** уларҙа кешеләрҙең изге һәм гонаһлы ғәмәлдәре үлсәнә. Үлсәгән саҡта бер кемгә ҡарата ла ғәҙелһеҙлек булмаясаҡ. Яҡшыһы ла һәм насары ла, һәр эш үлсәнәсәк. Шунан, һәр бер изге ғәмәл – ун, ә һәр гонаһ – бер, тип иҫәпләнәсәк.

**Сырат күпере:** ул – һәр кеше үтәсәк юл, күпер. Ул

күпер тамуҡ өҫтөнән төҙөләсәк. Ошо күперҙән үткәндә мосолмандар – ожмахҡа етәсәк, ә кафырҙар, ике йөҙлөләр һәм мәжүсиҙәр унан тамуҡҡа эләгәсәктәр. Был күперҙе үткәндәге ауырлаҡтар, ерҙәге тормошта Аллаһ Тәғәләгә хеҙмәт итеү кимәленән торасаҡ.

*Буйһоноу өсөн килгәнбеҙ, яуап өсөн баҫабыҙ,*
*Ер тормошонда юлсылар, терелер өсөн үләбеҙ.*

## ХИКӘЙӘ:

**Терелгән дүрт ҡош.**

Ибраһим бәйғәмбәр *(ғәләйһиссәләм)* әйткән: «Минең Раббым үлтерә лә һәм терелтә лә» һәм быға бөтә күңеле менән ышанған. Тик бер тапҡыр ул:

– Раббым! Нисек үлектәрҙе терелткәнеңде миңә күрһәт! – тип үтенгән.

Аллаһ уға:

– Эй, Ибраһим! Һин минең үлектәрҙе терелтеремә ышанмайһыңмы ни? – тигән.

– Әлбиттә, ышанам Раббым! Тик, әгәр мин уны үҙ күҙҙәрем менән күрһәм, минең йөрәгем тынысланыр ине, - тигән.

Шунда Аллаһ Тәғәлә Ибраһим *(ғәләйһиссәләм)* бәйғәмбәргә ҡушҡан:

– Дүрт ҡош тот, саҡырыу менән янына осоп килеп етерлек итеп уларҙы ҡулға эйәләштер. Һуңынан уларҙы үлтер! Кәүҙәләрен турап, бергә аралаштырып бута. Итте дүрт өлөшкә бүл һәм дүрт тауҙың башына алып барып ҡуй. Уларҙы саҡыр, һәм улар һиңә осоп килгәндәрен күрерһең. Быны күргәс, иманыңды ныҡыт һәм бел, Аллаһ Тәғәләнең ҡеүәтенең сиге юҡ, Ул нимә барлыҡҡа килтерһә лә мөһабәт аҡыл менән тулы.

Ибраһим бәйғәмбәр *(ғәләйһиссәләм)* ҡыуанған. Күгәрсен,

әтәс, ҡоҙғон һәм тауис тотоп ҡулға эйәләштергән. Ҡайҙа ғына булһалар ҙа, ҡоштар уның саҡырыуына шунда уҡ осоп килгән.

Бер көндө ул Аллаһ Тәғәләнең ҡушҡаны буйынса ҡоштарҙы үлтергән. Кәүҙәләрен ҡырҡҡыслап, өлөштәргә бүлеп һәм бөтәһен бергә бутап, уны дүрт өлөшкә бүлеп, дүрт тауҙың башына алып барып һалған. Һуңынан уңайлы урынға боҫоп, ҡоштарҙы үҙенә саҡыра башлаған. Терелгән ҡоштар шунда уҡ уға осоп ҡайтҡан.

Быны күреп, Ибраһим бәйғәмбәр *(ғәләйһиссәләм)* рәхмәт әйтеп, үҙенең Раббыһы алдына йығылған, һәм уның ышаныуы нығынған.

## ТӘҠДИРГӘ ҺӘМ ЯҘМЫШҠА ЫШАНЫУ

**Тәҡдир (Ҡәдәр):** Аллаһ Тәғәлә булған һәм буласаҡ нәмәләрҙең ваҡытын, хәл, урынын, һәм һәр ваҡиғаның киләсәктә буласаҡ урынын билдәләгән. Тәҡдир Аллаһ Тәғәләнең «Әл-Ғилем» сифатынан – «Ул бөтә нәмәне белә, нәмә булған һәм буласаҡ».

**Яҙмыш (Ҡәдә):** Бөтә нәмә лә Аллаһ Тәғәләнән ихтыяры буйынса була, һәр ваҡиға үҙ ваҡытында, айырым шарттарҙа һәм билдәләнгән урында. Бөтә нәмәне Аллаһ Тәғәлә билдәләй һәм бөтә буласаҡ эштәрҙе тормошҡа ашыра Ул. Кеше үҙенә яҙылған яҙмышты Аллаһ Тәғәлә тарафынан бирелгән ихтыяры буйынса һайлай ғына. Әгәр ҙә, тәҡдирҙе киләсәктең планы, ә яҙмышты – шул планға ярашлы тормошҡа ашырылған ваҡиғалар, тип күҙ алдына килтерһәк, Ҡадар менән Ҡаданың бәйләнешен аңларға мөмкин.

**Кешенең эштәре һәм улар өсөн яуаплылығы:**

**1)Кешенеңихтиярынанбашҡабулғантормошондағы ваҡиғалар:**

Үҙебеҙҙең тыумышыбыҙ, енесебеҙ, тышҡы ҡиәфәтебеҙ,

ата-әсәйҙе, ғүмер оҙонлоғон беҙ һайлай алмайбыҙ. Шуға былар өсөн яуап бирмәйбеҙ.

**2) Кешенең ихтыяры буйынса ҡылынған тормошондағы ваҡиғалары:**

Аллаһ Тәғәлә беҙгә һайларға мөмкинлек биргән. Әгәр ҙә беҙҙең һайлау ихтыяры булмаһа, Аллаһ беҙҙе гонаһтарыбыҙ өсөн язалай һәм яҡшы ғәмәлдәребеҙ өсөн сауаплай алмаҫ ине. Үҙ һайлауыбыҙ өсөн беҙ Аллаһ алдында яуаплыбыҙ. Яуаплылыҡ «Ни өсөн быны эшләнең?» һорауы менән билдәләнә.

Мәҫәлән, автобус водителе уны уңға, йә һулға бора ала, алға ла бара ала. Теләһә, тормозды файҙаланып, автобусты туҡтата ла ала. Әгәр һәләкәт була ҡалһа, водителдән автобустың двигателе нисек эшләй ине, тип һорамаясаҡтар, ә ни өсөн шулай шәп ҡыуғаны, ни өсөн уңға-һулға борғаны, ни өсөн ваҡытында туҡтамағаны өсөн яуап бирергә тура киләсәк.

## ЯҠШЫЛЫҠ МЕНӘН ЯУЫЗЛЫҠТЫҢ АЛДАН ЯҘЫЛҒАНЫНА ЫШАНЫУ

**Яҡшылыҡ** – ул һуңғы иҫәптә, кеше өсөн файҙалы.

**Яуызлыҡ** – ул кешегә зыян килтерә. Аллаһ Тәғәлә – берҙән бер барлыҡҡа килтереүсе, һәм ул яҡшылыҡ менән яуызлыҡты бар ҡылған. Изге Ҡөрьәндә: «Аллаһ – бар нәмәне барлыҡҡа килтереүсе» тиелгән. Беҙҙең динебеҙҙә яҡшы ғәмәлдәр эшләргә бойоролған, һәм яуыз эштәр тыйылған.

**Яуызлыҡты барлыҡҡа килтереүҙең мәғәнәһе:**

а) Ҡайһы саҡ беҙ үҙебеҙ өсөн яуызлыҡ тип һанаған нәмәләр, шулай булып беҙгә күренеүе лә ихтимал. Бар нәмәлә лә Аллаһ Тәғәләнең аҡылы ята. Беҙгә зарарлы һәм файҙаһыҙ булып күренгән, башҡалар өсөн кәрәкле һәм файҙалы булыуы ихтимал.

б) Яуызлыҡ ни тиклем яҡшылыҡ ҡиммәт икәнен күрһәтә. Мәҫәлән, кеше ауырып киткәнгә тиклем, һаулыҡтың ни саҡлы үҙе өсөн ҡәҙерле икәнен тулы итеп баһалай алмай.

**Беҙҙең изгелек менән яуызлыҡҡа мөнәсәббәтебеҙ:**

Һәр бер яҡшылыҡ өсөн беҙ Аллаһ Тәғәләгә рәхмәт әйтергә тейешбеҙ. Әгәр ҙә инде ауырлыҡ килһә, беҙ сабырлыҡ күрһәтергә һәм яуызлыҡтан һаҡланырға тейешбеҙ.

**Ризыҡ:** Һәр бер йән эйәһенә йәшәр өсөн Аллаһ Тәғәлә тарафынан ризыҡ бирелгән. Бөтә кешенең вазифаһы үҙенә ризыҡ табыу. Үҙенең ашарына рөхсәт ителгән (хәләл), йә тыйылған (хәрәм) юл менән ризыҡ табыу һәр бер кешенең үҙ ихтиярында.

**Әжәл:** кешенең был ерҙәге донъяла булған ваҡытының бөтөүе. Бер кем дә үҙенең ҡасан үлер ваҡытын белмәй. Йәшлектәме, йә ҡартайғас, һау йә ауырыу саҡтамы – әжәл Аллаһ Тәғәләнең яҙыуы буйынса киләсәк. Ҡөрьәндең изге аяты иҫкәртә:

**«...һәм уларҙың әжәле килһә, улар бер сәғәткә лә, кисектерә лә, тиҙләтә лә алмаҫтар»** *(Ән-Нәхл, 61)*



## ҠЫҪҠА СҮРӘЛӘР ҺӘМ АЯТТАРҘЫ УҠЫУ

**ИҒТИБАР ИТЕГЕҘ:** Транскрипция буйынса уҡыу ғәрәп теленән айырыла. Сүрәләрҙе ғәрәп телендә яттан өйрәнергә тырышығыҙ.

### СҮБХӘНӘКӘ

سُبْحَانَكَ اللّٰهُمَّ وَبِحَمْدِكَ ۝ وَتَبَارَكَ اسْمُكَ ۝ وَتَعَالٰى جَدُّكَ ۝ (وَجَلَّ ثَنَاؤُكَ) ۝ وَ لَآ اِلٰهَ غَيْرُكَ

*«Сүбхәәнәкәл-лаһүммә үә бихәмдик үә тәбәрәкәсмукә, үә тәгәәләә жәддукә (үә жәллә çәнәүк ) үә ләә иләәһә гайрук».*

Иҫкәрмә: йәйәләр эсендәге «Үә жәллә çәнәүк» һүҙҙәре йыназа намаҙында ғына уҡыла.

**Мәғәнәһе:** Һине тәсбих итәм, Һине маҡтайым. Һинең исемең мөбәрәк, даның олуғтыр. Һинән башҡа тәңре юҡ.

### ӘТ-ТӘХИӘТ

اَلتَّحِيَّاتُ لِلّٰهِ وَالصَّلَوَاتُ وَالطَّيِّبَاتُ ۝ اَلسَّلَامُ عَلَيْكَ اَيُّهَا النَّبِيُّ وَرَحْمَةُ اللّٰهِ وَبَرَكَاتُهُ ۝ اَلسَّلَامُ عَلَيْنَا وَعَلٰى عِبَادِاللّٰهِ الصَّالِحِينَ ۝ اَشْهَدُ اَنْ لَآ اِلٰهَ اِلَّا اللّٰهُ وَاَشْهَدُ اَنَّ مُحَمَّدًا عَبْدُهُ وَرَسُولُهُ ۝

*«Әт-тәхиййәәтү лилләәһи үә-ссаләүәәтү үә-ттаййибәәт. Әс-сәләәмү гәләйкә әййүһән-нәбиййү үә рахмәтуллааһи үәбәракәәтүһ. Әс-сәләәмү гәләйнә үә гәләә гибәәдилләәһи-ссаалихиин. Әшһәду әл-ләә иләәһә илләллааһу үә әшһәду әннә Мөхәммәдән гәбдүһү үә расүүлүһ».*

**Мәғәнәһе:** Бөтөн ғибәҙәттәр (тел ғибәҙәттәре лә, тән ғибәҙәттәре лә, мал ғибәҙәттәре лә) Аллаһ Тәғәлә өсөн. Эй, бәйғәмбәр, Һиңә Аллаһ Тәғәләнең сәләме булһын, рәхмәт үә бәрәкәттәре ирешһен. Беҙгә һәм Аллаһ Тәғәләнең барлыҡ изге бәндәләренә лә сәләм булһын. Таныҡлыҡ бирәм, Аллаһ Тәғәләнән башҡа һис бер тәңре юҡ, Мөхәммәт *(сәллаллаһу ғәләйһи вә сәлләм)* уның ҡоло һәм дә бәйғәмбәре.

## АЛЛАҺУММӘ САЛЛИ

اَللّٰهُمَّ صَلِّ عَلٰى مُحَمَّدٍ وَ عَلٰى آلِ مُحَمَّدٍ •

كَمَا صَلَّيْتَ عَلٰى اِبْرَاهِيمَ وَ عَلٰى آلِ اِبْرَاهِيمَ • اِنَّكَ حَمِيدٌ مَجِيدٌ

*Аллаһуммә салли ғәләә Мөхәммәдин үә ғәләә әәли Мөхәммәд. Кәмәә салләйтә ғәләә Ибраайиимә үә ғәләә әәли Ибраайиимә иннәкә хәмиидум мәжиид.*

**Мәғәнәһе:** «Аллаһым! Мөхәммәт бәйғәмбәргә үә ғаиләһенә һәм Уның өммәтенә рәхмәт әйлә, Ибраһим өммәтенә бәрәкәт ирештергәнең кеүек. Һин бик маҡтаулы, бик олуғһың!»

## АЛЛАҺУММӘ БАРИК

اَللّٰهُمَّ بَارِكْ عَلٰى مُحَمَّدٍ وَ عَلٰى آلِ مُحَمَّدٍ • كَمَا بَارَكْتَ

عَلٰى اِبْرَاهِيمَ وَ عَلٰى آلِ اِبْرَاهِيمَ اِنَّكَ حَمِيدٌ مَجِيدٌ •

*Аллаһуммә бәәрик ғәләә Мөхәммәдин үә ғәләә әәли Мөхәммәд. Кәмәә бәрәктә ғәләә Ибраайиимә үә ғәләә әәли Ибраайиимә иннәкә хәмиидум мәжиид.*

**Мәғәнәһе:** «Аллаһым! Мөхәммәд бәйғәмбәргә үә ғаиләһенә һәм Уның өммәтенә хәйер үә бәрәкәт бир,

Ибраһим өммәтенә биргән кеүек. Һин бик мактаулы, бик олуғһың!»

## РАББӘНӘ

رَبَّنَا آتِنَا فِي الدُّنْيَا حَسَنَةً وَ فِي الْآخِرَةِ حَسَنَةً وَقِنَا عَذَابَ النَّارِ •

رَبَّنَا اغْفِرْ لِي وَ لِوَالِدَيَّ وَ لِلْمُؤْمِنِينَ يَوْمَ يَقُومُ الْحِسَابُ •

*Раббәнәә әәтинәә фиддунйә хәсәнәтән үә фил әәхирәти хәсәнәтән үә ҡынәә ғәҙәбәннар.*

*Раббәнәә-ғфирлии үә лиүәлидәййә үә лилмөьмининнә йәүмә йәҡуумул хисаб.*

**Мәғәнәһе:** «Әй Раббыбыҙ! Беҙгә донъяла яҡшылыҡ үә гүзәллек, әхирәттә лә яҡшылыҡ, гүзәллек бир, һәм беҙҙе йәһәннәм ғазабынан һаҡла!

Әй Раббыбыҙ! Мине әсәйемде үә атайымды һәм барса мөьминдәрҙе хисап көнөндә (һәр кемдән һорау алынасаҡ көндә) ғәфү әйлә!»

## ҠУНУТ ДОҒАҺЫ

اَللّٰهُمَّ إِنَّا نَسْتَعِينُكَ وَ نَسْتَغْفِرُكَ وَ نَسْتَهْدِيكَ • وَ نُؤْمِنُ بِكَ وَ نَتُوبُ إِلَيْكَ • وَ نَتَوَكَّلُ عَلَيْكَ وَ نُثْنِي عَلَيْكَ الْخَيْرَ كُلَّهُ نَشْكُرُكَ وَ لَا نَكْفُرُكَ وَ نَخْلَعُ وَ نَتْرُكُ مَنْ يَفْجُرُكَ •

*Аллааһүммә иннә нәстәғиинүкә үә нәстәғфирүкә үә нәстәһдиик. Үә нү'минү бикә үә нәтуубү иләйк. Үә нәтәүәккәлү ғәләйкә үә нүсни ғәләйкәл-хайра күлләһү нәшкүрүкә үә лә нәкфүрүкә үә нахләғү үә нәтрүкү мән йәфжүрүк.*

**Мәғәнәһе:** «Аллаһым! Һинән ярҙам һорайбыҙ, Һинән гонаһтарыбыҙҙы ғәфү итеүеңде һәм риза булған нәмәләреңде һәҙиә итеүеңде һорайбыҙ. Һиңә тәүбә итәбеҙ. Һиңә ышанабыҙ. Беҙгә биргән бөтөн ниғмәттәреңде белеп, Һине хәйер менән маҡтайбыҙ. Һиңә өҙлөкһөҙ шөкөр итәбеҙ. Һис бер ниғмәтеңде инҡар итмәйбеҙ. Ниғмәттәреңде инҡар иткәндәрҙән һәм Һиңә ҡаршы килгәндәрҙән айырылырбыҙ».

اَللَّهُمَّ اِيَّاكَ نَعْبُدُ وَ لَكَ نُصَلِّى وَ نَسْجُدُ وَ اِلَيْكَ نَسعٰى وَ نَحْفِدُ نَرْجُو رَحْمَتَكَ وَ نَخْشَى عَذَابَكَ اِنَّ عَذَابَكَ ۞ الْجِدَّ بِالْكُفَّارِ مُلْحِقٌ ۞

*Аллааһүммә иййәкә нәғбүдү үә ләкә нүсаллии үә нәсжүдү үә иләйкә нәсга үә наһфидү нәржүү рахмәтәкә үә нахшәә ғаҙабәкә иннә ғаҙаабәкә бил-күффәәри мүлхиҡ.*

**Мәғәнәһе:** «Аллаһым! Бары тик Һиңә генә ҡоллоҡ итәбеҙ. Намаҙҙы бары тик Һинең өсөн ҡылабыҙ, бары тик Һиңә сәждә ҡылабыҙ. Бары тик Һиңә ашҡынабыҙ һәм Һиңә яҡынайта торған эштәрҙе эшләргә тырышабыҙ. Ғибәҙәттәрҙе һөйөнөслө итербеҙ. Рәхмәтеңдең дауамлы һәм күп булыуын теләйбеҙ. Ғазабыңдан ҡурҡабыҙ. Шикһеҙ, Һинең ғазабың кафырҙарға һәм иманһыҙҙарға төшөр».

## АЯТЕЛ КӨРСИ

بِسْمِ اللَّهِ الرَّحْمَنِ الرَّحِيمِ ۞ اللَّهُ لاَ إِلَهَ إِلاَّ هُوَ الْحَيُّ الْقَيُّومُ لاَ تَأْخُذُهُ سِنَةٌ وَلاَ نَوْمٌ لَّهُ مَا فِي السَّمَاوَاتِ وَمَا فِي الأَرْضِ مَن ذَا الَّذِي يَشْفَعُ عِنْدَهُ إِلاَّ بِإِذْنِهِ يَعْلَمُ مَا بَيْنَ أَيْدِيهِمْ وَمَا خَلْفَهُمْ وَلاَ يُحِيطُونَ بِشَيْءٍ مِّنْ عِلْمِهِ إِلاَّ بِمَا شَاء وَسِعَ كُرْسِيُّهُ السَّمَاوَاتِ وَالأَرْضَ وَلاَ يَؤُودُهُ حِفْظُهُمَا وَهُوَ الْعَلِيُّ الْعَظِيمُ

*Аллааһу ләә иләәһә илләә һүүәл-хәййүл-ҡаййүүмү ләә тәьхуҙүһү синәтүү үә ләә нәүм. Ләһү мәә фи-ссәмәәүәәти үә мәә фил-ард. Мәң ҙәлләҙии йәшфәгү гиндәһү илләә бииҙниһ. Йәгләмү мәә бәйнә әйдииһим үә мәә хальфәһүм үә ләә йухиитуунә бишәйим мин гилмиһи иллә бимәә шәә. Үәсигә күрсиййүһү-ссәмәүәәти үәл-ард. Үә ләә йәүүдүһү хифзуһүммәә үә һүүәл-гәлиййүл гәзыиим.*

**Мәғәнәһе:** «Аллаһ, Унан, тере һәм мәңге булғандан башҡа – илаһ юҡ. Уны йоҡомһорау ҙа, йоҡо ла алмай; күктәрҙә һәм Ерҙә булған нәмәләр – Уныҡы. Унын алдында. Унын рөхсәтенән башҡа, кем яҡлай алыр? Ул уларға ҡәҙәр булғандарҙы ла һәм уларҙан һуң булғандарын да белә, ә улар, Унын теләгенән тыш, Унын белеменән башҡа бер нәмә лә аңлай алмай. Унын тәхете күктәрҙе һәм Ерҙе биләй, һәм уларҙы һаҡлау Уға ауыр түгел, – Ул бөйөк, олуғ!»

## «ӘЛ-ФАТИХА» СҮРӘҺЕ

بِسْمِ اللَّهِ الرَّحْمَٰنِ الرَّحِيمِ

الْحَمْدُ لِلَّهِ رَبِّ الْعَالَمِينَ ﴿٢﴾ الرَّحْمَٰنِ الرَّحِيمِ ﴿٣﴾ مَالِكِ يَوْمِ الدِّينِ ﴿٤﴾ إِيَّاكَ نَعْبُدُ وَإِيَّاكَ نَسْتَعِينُ ﴿٥﴾ اهْدِنَا الصِّرَاطَ الْمُسْتَقِيمَ ﴿٦﴾ صِرَاطَ الَّذِينَ أَنْعَمْتَ عَلَيْهِمْ غَيْرِ الْمَغْضُوبِ عَلَيْهِمْ وَلَا الضَّالِّينَ ﴿٧﴾

*Бисмилләәһи-ррахмәәни-ррахиим! Әл-хәмду лилләәһи рабби л-гәәләмиин. Әр-рахмәәни-ррахиим. Мәәлики йәүми-ддиин. Ийиәәкә нәгбүдү үә ийиәәкә нәстәгиин. Иһдинәә-ссыйраатальмустәкиим. Сыйраата-лләҙиинә әнгәмтә гәләйһим гайриль магдууби гәләйһим үә ләә-ддаальлиин!*

**Мәғәнәһе:** «Ғаләмдәр Раббыһы Аллаһҡа – маҡтау, Рәхмәтлегә, Рәхимлегә, хөкөм көнөнөң Батшаһына! Беҙ һиңә генә ғибәҙәт ҡылабыҙ һәм һинән генә ярҙам һорайбыҙ! Беҙҙе тура юлдан алып бар. Үҙең ниғмәт күрһәткәндәрҙең юлынан, асыуға тарығандар һәм аҙашҡандар юлынан түгел!»

## «ӘН-НӘС» СҮРӘҺЕ:

بِسْمِ اللهِ الرَّحْمَنِ الرَّحِيمِ

قُلْ أَعُوذُ بِرَبِّ النَّاسِ ﴿١﴾ مَلِكِ النَّاسِ ﴿٢﴾ إِلَهِ النَّاسِ ﴿٣﴾ مِن شَرِّ الْوَسْوَاسِ الْخَنَّاسِ ﴿٤﴾ الَّذِي يُوَسْوِسُ فِي صُدُورِ النَّاسِ ﴿٥﴾ مِنَ الْجِنَّةِ وَ النَّاسِ ﴿٦﴾

*Бисмилләәһи-ррахмәәни-ррахиим! Ҡуль әғүҙү бирабби-ннәәс. Мәлики-ннәәс. Иләәһи-ннәәс. Миң шәррил-үәсүәәсил-ханнәәс. Әлләҙии йүүәсүисү фии судүүри-ннәәс. Минәл-джиннәти үә-ннәәс.*

**Мәғәнәһе:** «Әйт: «Кешеләрҙең Раббыһына һыйынам, кешеләрҙең батшаһына, кешеләрҙең илаһына, йәшерен үәсүәсләүсенең яуызлығынан, кешеләрҙең күңелдәренә үәсүәсә һалыусынан, ендәрҙән һәм кешеләрҙән!»

## «ӘЛ-ФӘЛӘҠ» СҮРӘҺЕ:

بِسْمِ اللهِ الرَّحْمَنِ الرَّحِيمِ

قُلْ أَعُوذُ بِرَبِّ الْفَلَقِ ﴿١﴾ مِن شَرِّ مَا خَلَقَ ﴿٢﴾ وَمِن شَرِّ غَاسِقٍ إِذَا وَقَبَ ﴿٣﴾ وَمِن شَرِّ النَّفَّاثَاتِ فِي الْعُقَدِ ﴿٤﴾ وَمِن شَرِّ حَاسِدٍ إِذَا حَسَدَ ﴿٥﴾

*Бисмилләәһи-ррахмәәни-ррахиим! Ҡуль әғүүҙү бираббил-фәләк. Миң шәрри мәә халәк. Үә миң шәрри гаасиҡин иҙәә үәкаб. Үә миң шәрриннәффәәҫәәти фил-ғүкәд. Үә миң шәрри хәәсидин иҙәә хәсәд.*

**Мәғәнәһе:** «Әйт: «Таң Раббыһына һыйынам, Ул барлыҡҡа килтергәндең яуызлығынан, ҡараңғылыҡтың ҡаплаған ваҡыттағы яуызлығынан, төйөндәргә өрөүсе ҡатындарҙың яуызлығынан, хөсөттөң хөсөтләшкән ваҡыттағы яуызлығынан!»

### «ӘЛ-ИХЛАС» СҮРӘҺЕ:

*Бисмилләәһи-ррахмәәни-ррахим! Ҡуль һүүә-ллааһу әхәд. Аллааһү-ссамәд. Ләм йәлид үә ләм йүүләд. Үә ләм йәкүл-ләһү күфүүән әхәд.*

**Мәғәнәһе:** «Әйт: «Ул Аллаһ бер, Аллаһ мәңге, Ул тыуҙырманы һәм тыуҙырылманы, һәм бер кем дә Уға тиңдәш булманы».

بِسْمِ اللَّهِ الرَّحْمَنِ الرَّحِيمِ

قُلْ هُوَ اللَّهُ أَحَدٌ ﴿١﴾ اللَّهُ الصَّمَدُ ﴿٢﴾ لَمْ يَلِدْ وَلَمْ يُولَدْ ﴿٣﴾ وَلَمْ يَكُن لَّهُ كُفُوًا أَحَدٌ ﴿٤﴾

## БӘЛӘ-ҠАЗАНАН, ҠАЙҒЫ-ХӘСРӘТТӘН ҺАҠЛАНЫР ӨСӨН УҠЫЛА ТОРҒАН СҮРӘЛӘР:

### ӘЛ-МӘСӘД СҮРӘҺЕ:

*Бисмилләәһи-ррахмәәни-ррахиим! Тәббәт йәдәә әбии ләһәбиү үә тәбб. Мәә әгнәә гәнһү мәәлүһү үә мәә кәсәб. Сәйаслә нәәраң ҙәәтә ләһәб. Үәмраәтүһү хәммәәләтәл-хәтаб. Фии джиидиһәә хәблүммимммәсәд.*

**Мәғәнәһе:** «Әбү Ләһәптең ике ҡулы ла һәләк булһын, һәм ул үҙе һәләк булды! Уға уның малы ла һәм кәсеп итеп тапҡаны ла ярҙам итмәне. Ул ялҡынлы утта янасаҡ, һәм уның ҡатыны – утын ташыусы. Ул ҡатындың муйынында хөрмә ағасының сүсенән бау булыр».

بِسْمِ اللَّهِ الرَّحْمَنِ الرَّحِيمِ

تَبَّتْ يَدَا أَبِي لَهَبٍ وَتَبَّ ﴿١﴾ مَا أَغْنَى عَنْهُ مَالُهُ وَمَا كَسَبَ ﴿٢﴾ سَيَصْلَى نَارًا ذَاتَ لَهَبٍ ﴿٣﴾ وَامْرَأَتُهُ حَمَّالَةَ الْحَطَبِ ﴿٤﴾ فِي جِيدِهَا حَبْلٌ مِّن مَّسَدٍ ﴿٥﴾

## ӘН-НАСР СҮРӘҺЕ:

بِسْمِ اللهِ الرَّحْمَنِ الرَّحِيمِ

إِذَا جَاءَ نَصْرُ اللَّهِ وَالْفَتْحُ «١»
وَرَأَيْتَ النَّاسَ يَدْخُلُونَ فِي دِينِ
اللَّهِ أَفْوَاجاً «٢» فَسَبِّحْ بِحَمْدِ
رَبِّكَ وَاسْتَغْفِرْهُ إِنَّهُ كَانَ تَوَّاباً «٣»

*Бисмилләәһи-ррахмәәни-ррахиим! Иҙәә джәә'ә насруллааһи үәлфәтх. Үә раәйтә-ннәәсә йәдхулуунә фии диини-лләһи әфүәәджә. Фәсәббих бихәмди раббикә үәстәгфирһү иннәһү кәәнә тәүүәәбәә.*

**Мәғәнәһе:** «Алланың ярҙамы һәм еңеү килгәс, һәм һин кешеләрҙең Аллаһ диненә төркөмләп инеүҙәрен күргәс, шул саҡта Раббыңды данлап тәсбих әйт һәм Унан ярлыҡау һора, Ул, ысынлап та, тәүбәләрҙе ҡабул итеүсе».

## «ӘЛ-КӘФИРУН» СҮРӘҺЕ

بِسْمِ اللهِ الرَّحْمَنِ الرَّحِيمِ

قُلْ يَا أَيُّهَا الْكَافِرُونَ «١» لَا
أَعْبُدُ مَا تَعْبُدُونَ «٢» وَلَا أَنتُمْ
عَابِدُونَ مَا أَعْبُدُ «٣» وَلَا أَنَا
عَابِدٌ مَّا عَبَدتُّمْ «٤» وَلَا أَنتُمْ
عَابِدُونَ مَا أَعْبُدُ «٥» لَكُمْ
دِينُكُمْ وَلِيَ دِينِ «٦»

*Бисмилләәһи-ррахмәәни-ррахиим! Ҡуль йәә әййүһәл-кәәфируун. Ләә әгбүдү мәә тәгбүдүүн. Үә ләә әнтүм гәәбидүүнә мәә әгбүд. Үә ләә әнәә гәәбидуммәә гәбәдтүм. Үә ләә әнтүм гәәбидүүнә мәә әгбүд. Ләкүм диинүкүм үә лийә диин.*

**Мәғәнәһе:** «Әйт: «Эй, һеҙ, кафырҙар! Һеҙ табынған нәмәгә мин табынмайым. Һәм мин ғибәҙәт ҡылған нәмәгә һеҙ ғибәҙәт ҡылыусы түгелһегеҙ. Һәм һеҙ табынған нәмәгә мин табыныусы түгел. Һәм мин ғибәҙәт ҡылған нәмәгә һеҙ ғибәҙәт ҡылыусы түгелһегеҙ. Һеҙҙең үҙ динегеҙ, минең үҙ динем!»

## «ӘЛ-КӘҮҪӘР» СҮРӘҺЕ:

*Бисмилләәһи-ррахмәәни-ррахиим! Иннәә әғтайнәәкәл-кәүҫәр. Фәсалли лираббикә үәнхәр. Иннәә шәәниәкә һүүәл-әбтәр.*

**Мәғәнәһе:** «Беҙ ысынлап та, һиңә муллыҡ бирҙек. Шунлыҡтан Раббыңа намаҙ уҡы һәм ҡорбан сал! Һинең дошманың бит нәҫелһеҙ ҡалыусы».

بِسْمِ اللَّهِ الرَّحْمَنِ الرَّحِيمِ

إِنَّا أَعْطَيْنَاكَ الْكَوْثَرَ ﴿١﴾ فَصَلِّ
لِرَبِّكَ وَانْحَرْ ﴿٢﴾ إِنَّ شَانِئَكَ
هُوَ الْأَبْتَرُ ﴿٣﴾

## «ӘЛ-МӘӘҒҮҮН» СҮРӘҺЕ:

*Бисмилләәһи-ррахмәәни-ррахиим! Ә раәйтә-лләҙии йүкәҙҙибү биддиин. Фәҙәәликә-лләҙии йәдүғғүл-йәтиим. Үә ләә йәхудду ғәләә тағәәмилмискиин. Фәүәйлүл-лилмүсаллиин. Әлләҙиинә һүм ғәң саләәтиһим сәһуун. Әлләҙиинә һүм йүрауна үә йәмнәғүүнәл-мәәғүүн.*

**Мәғәнәһе:** «Динде ялғанға һанаған кешене күрҙеңме һин? Ул бит етемде ситкә ҡыуа һәм ярлыны туйҙырыуға өндәмәй. Һәм ҡайғы булһын (ундай) намаҙ уҡыусыларға, улар намаҙҙарына иғтибарһыҙ, улар ике йөҙлө һәм хәйер-саҙаҡа биреүҙе кире ҡағалар».

بِسْمِ اللَّهِ الرَّحْمَنِ الرَّحِيمِ

أَرَأَيْتَ الَّذِي يُكَذِّبُ بِالدِّينِ ﴿١﴾
فَذَلِكَ الَّذِي يَدُعُّ الْيَتِيمَ ﴿٢﴾
وَلَا يَحُضُّ عَلَى طَعَامِ الْمِسْكِينِ
﴿٣﴾ فَوَيْلٌ لِلْمُصَلِّينَ ﴿٤﴾ الَّذِينَ
هُمْ عَنْ صَلَاتِهِمْ سَاهُونَ ﴿٥﴾
الَّذِينَ هُمْ يُرَاءُونَ ﴿٦﴾ وَيَمْنَعُونَ
الْمَاعُونَ ﴿٧﴾

## ҠУРӘЙШ СҮРӘҺЕ:

*Бисмилләәһи-ррахмәәни-ррахиим! Ли-иилләәфи ҡурайш. Иләәфиһим рихләтә-шшитәә-и үә-ссайф. Фәлйәгбүдүү раббә һәәҙәл-бәйт. Әлләҙи атгәмәһүм миң джүүгиү үә әәмәнәһүм мин хауф.*

بِسْمِ اللّٰهِ الرَّحْمَنِ الرَّحِيمِ

لِإِيلَافِ قُرَيْشٍ ﴿١﴾ إِيلَافِهِمْ رِحْلَةَ الشِّتَاءِ وَالصَّيْفِ ﴿٢﴾ فَلْيَعْبُدُوا رَبَّ هَذَا الْبَيْتِ ﴿٣﴾ الَّذِي أَطْعَمَهُم مِّن جُوعٍ وَآمَنَهُم مِّنْ خَوْفٍ ﴿٤﴾

**Мәғәнәһе:** «Ҡөрәйш ырыуының берләшеүе өсөн, берләшеүҙәре ҡыш та һәм йәй ҙә сәфәрҙә булыуҙарында, улар ошо йорттоң (Ҡәғбәнең) Раббыһына ғибәҙәт ҡылһындар, уларҙы аслыҡтан туйҙырыусы һәм ҡурҡыныстан һаҡлаусыға».

## «ӘЛ-ФИЛ» СҮРӘҺЕ:

*Бисмилләәһи-ррахмәәни-ррахиим! Ә ләм тәра кәйфә фәгәлә раббүкә би-асхәәбил-фиил. Ә ләм йәджгәл кәйдәһүм фии тадлиил. Үә әрсәлә гәләйһим тайран әбәәбиил. Тәрмииһим бихиджәәратим-миң сиджжиил. Фәджәгәләһүм кәгасфим-мәькүүл.*

بِسْمِ اللّٰهِ الرَّحْمَنِ الرَّحِيمِ

أَلَمْ تَرَ كَيْفَ فَعَلَ رَبُّكَ بِأَصْحَابِ الْفِيلِ ﴿١﴾ أَلَمْ يَجْعَلْ كَيْدَهُمْ فِي تَضْلِيلٍ ﴿٢﴾ وَأَرْسَلَ عَلَيْهِمْ طَيْرًا أَبَابِيلَ ﴿٣﴾ تَرْمِيهِم بِحِجَارَةٍ مِّن سِجِّيلٍ ﴿٤﴾ فَجَعَلَهُمْ كَعَصْفٍ مَّأْكُولٍ ﴿٥﴾

**Мәғәнәһе:** «Фил хужаларын Раббыңдың ни эшләткәнен күрмәнеңме ни һин? Уларҙың хәйләләрен юҡҡа сығарманымы ни Ул? Һәм Ул уларға ҡоштар тубын ебәрҙе. Ул ҡоштар уларға яндырылған балсыҡтан яһалған таштар атты. Һәм Ул уларҙы ашалған кәбәк шикелле итте».

## ЙӨКМӘТКЕ

Динебеҙ хаҡында һорауҙар һәм ҡыҫҡа яуаптар.....5
32 Фарыз.....8
Тәһәрәт алыу.....11
Тәйәммүм.....17
Оло тәһәрәт – Ғөсөл.....19
Аҙан.....22
Намаҙ.....24
Исламға илткән ҡапҡалар.....51
Аллаһҡа инаныу.....52
Фәрештәләргә ышаныу.....58
Изге яҙмаларға (китаптарға) ышаныу.....60
Бәйғәмбәрҙәргә ышаныу.....61
Ҡиәмәт көнөнә ышаныу.....63
Тәҡдиргә һәм яҙмышҡа ышаныу.....66
Яҡшылыҡ менән яуызлыҡ алдан яҙылғанына ышаныу.....67
Ҡыҫҡа сүрәләр һәм аяттарҙы уҡыу.....69

*Асым Уйсал*

**Учусь тахарату и намазу**

На башкирском языке

Перевод - Фанира Гайсина
Литературный редактор - Сальман Ярмуллин
Канонический редактор - Айдар Хабибуллин
Дизайн - Адем Оздемир